ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

8-14 июнь (һөтай) 2019

№23 (857)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреклe

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Салауатлы, тимәк, доғалы ил

Батырыбыҙҙың тыуыуына - 265 йыл



3

Бала күңелен күреп...



5

Әкиәт һөйләп...



туған тел мөғжизәһе тыуҙырҙылар 6

Ауыл эшҡыуарҙары -



еңел булмаған юл кешеләре улар 8-9

ТВ-программа 14

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!**
***Әлеге мәлдә республика ҡалалары һәм райондарының бөтә почта бүлексәләрендә лә 50665 индекслы "Киске Өфө"гә 2019 йылдың икенсе яртыһына - 624 һумға, абонент йәшнигенә - 594 һум 06 тингә; Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I-II группа инвалидтары - 563 һум 40 тингә, абонент йәшнигенә - 539 һум 46 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер матур баҫмалар һәм Башҡортостан "Юлдаш" радиоһы фонды аудиокитабы менән бүләкләнер. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ҡунаҡтарға, сит-яттарға Өфө тураһында ниҙәр һөйләр инең?

***Юлдаш ЙОСОПОВ, тарих фәндәре кандидаты:*** Ҡунаҡтарға, сит-яттарға түгел, хатта үҙемдең милләттәштәргә, ғүмер буйы Өфөлә йәшәгән халыҡтарға ла баш ҡалабыҙҙың боронғолоғо хаҡында һөйләп, ошоно раҫлаусы тарихи документтар, археологик табыштар менән уларҙы таныштырыр инем, сөнки күпме яҙыуыбыҙға, телевидение-радио аша һөйләүебеҙгә ҡарамаҫтан, күптәр Өфө тарихын белмәй. Был бик ҡыҙғаныс. Бөгөнгө менән генә, ашап-эсеүҙе ҡайғыртып ҡына йәшәй ҡайһы берәүҙәр, ә үҙҙәренең быуат-быуат тарихы булған боронғолоҡ аңҡып торған Башҡорт илендә йәшәүе хаҡында уйлап та бирмәгәндәр, битарафтар күп. Ҡабатлауҙан доға иҫкермәй, тигәндәй, баш ҡалабыҙ тарихы хаҡында ситтәргә лә, үҙебеҙҙекеләргә лә күпме һөйләһәң дә артыҡ булмаҫ. Өфөбөҙҙөң боронғолоғо рәсми кимәлдә танылыу алды. Археологик ҡомартҡылар, Европа, шәреҡ ғалимдарының яҙмалары, боронғо карталар хәҙерге Өфөнөң боронғо Башҡорт ҡалаһы нигеҙендә ултырыуын тулыһынса раҫлай. Башҡорттарҙың үҙҙәренең тарихи хәтеренән теркәлгән яҙмалар ҙа был инаныуҙы нығыта. Ҡасандыр әлеге Өфө урынында башҡорттарҙың бөйөк ҡалаһы булыуы хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе иҫләүе хаҡында Рычков та яҙа. Шулай уҡ "Сынғыҙнамә" дастанында ла Өфө йылғаһы тамағында ҡала булыуы, унда хан йәшәүе бәйән ителә. Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың шәхси архивында ҡыҙыҡлы бер мәғлүмәткә юлыҡҡайным. Унда башҡорттарҙың етмеш ҡалаһы барлығы телгә алына. Унда әйтелеүенсә, заманында баш ҡала Башҡорт була һәм ул башҡа ҡалаларҙың үҙәге булып тора. Ошоларҙан сығып, күп йыллыҡ археологик эҙләнеүҙәр һөҙөмтәһендә Өфөлә табылған - "Өфө-II" ҡаласығын Европа ғалимдары урта быуаттарҙа үҙ карталарында билдәләгән Башҡорт ҡалаһы тип әйтергә тулы нигеҙ бар. Быуат асышы тип танылған был "Өфө-II" ҡаласығы хаҡында "Киске Өфө" гәзитендә лә бик күп ҡиммәтле материалдар баҫылды. Кемдәр гәзит уҡый, улар был мәҡәләләр менән яҡшы таныштыр. Көньяҡ Уралда тарихи әһәмиәте буйынса Өфөгә тиң булған башҡа Урта быуат археологик ҡомартҡыһы юҡ, тип таный ғалимдар. Был йәһәттән уның боронғолоғо археологик һәм яҙма сығанаҡтарға нигеҙләнеп раҫланған Мәскәү, Новгород, Киев, Ташкент ҡалалары менән генә сағыштырырға мөмкин. Был хаҡта ентекләберәк белергә теләүселәр "Өфө-II ҡаласығы" музей-заповеднигына барып, тарихи материалдар, археологик ҡаҙылма табыштары менән таныша ала.

**(Дауамы 2-се биттә).**

БАЙРАМ МЕНӘН!

## ЯҘМЫШЫМ ҺИН – ӨФӨ!

*Өфө буйлап атлап киләм,*
*Таныш миңә һәр урам.*
*Бөтә кеше туған кеүек,*
*Һаулыҡ һорашып уҙам.*

*Ғүмер ебен һиндә һүтәм,*
*Күңелгә яҡын ҡалам.*
*Таңдарыңды, кистәреңде*
*Моңло йырҙарға һалам.*

*Урам буйлап атлап киләм,*
*Иңгә йондоҙҙар яуа.*
*Бәхеттән ҡанатланғанда*
*Бейек тә түгел һауа.*

*Йәшлек эҙҙәрем һаҡлаған*
*Урамдар буйлап үтәм.*
*Йәш, һылыу ҡыҙҙарға ҡарап,*
*Гүйә, йәшәреп китәм.*

*Ағас өйҙәрең янынан*
*Эттәр өрә ауылса.*
*Ауылдарҙан килеп, һиндә*
*Йәштәр һәләтен аса.*

*Егеттәре ҡыйыу, етеҙ,*
*Урал батыр тоҡомло.*
*Ҡыҙҙар - Һомай нәҫелдәре,*
*Сибәрлектә юҡ тиңе.*

*Шул йәштәргә ҡараниһәм,*
*Йәшәреп китәм кеүек.*
*Баш ҡалам да янып йәшәй*
*Йәштәрсә балҡып, көлөп.*

*Күңелең киң, барыһын да*
*Ҡосағыңа алаһың.*
*Донъялағы иң матур бер*
*Ҡала булып ҡалаһың.*

*Өфөләргә тип килдем дә*
*Ғүмерлеккә бәйләндем.*
*Һиндә тыуып үҫмәһәм дә,*
*Яҙмышыма әйләндең.*

**Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА.**



12+

✓ Өфө - матур, йәшел, эшлекле, йәшәү һәм эшләү өсөн бөтә мөмкинлектәре лә булған баш ҡала. Уны һаҡлауҙы, матурлыҡта тотоуҙы әллә кемгә тапшырып ҡуймайыҡ, ә ҡулыбыҙҙан килгәнен эшләйек, хөрмәтле Өфө халҡы.



БАШ ҠАЛАМ



**Минең әллә нисә быуын ата-бабаларым Өфөлә тыуған һәм йәшәгән. Уҡытыусы, табип, юрист, инженерҙарҙан торған, урыҫ милләтле, интеллигент ғаиләнәнмен. Мин дә ошо матур ҡалала үҫтем, кәләшем дә Өфөнөң үҙенән, хәҙер ике ҡыҙыбыҙ буй еткереп килә. Архитектор булараҡ, күп ҡалаларҙа булырға тура килде, ләкин үҙемдең тыуған Өфөмдө уларҙың береһенә алыштырырға уйымда ла булманы. Өфө - минең үткәнем, бөгөнгөм һәм балаларым яҙмышында сағыласаҡ киләсәгем.**

# АЛЫШТЫРҒЫҺЫҘ ӨФӨМ...

Өфө тураһында үҙебеҙҙең ҡала халҡынан да, килгән-киткән кешенән дә күп һүҙҙәр ишетәм. Улар араһында яҡшыһы ла, яманы ла бар, нейтраль тон һаҡлап әйткәндәре лә бихисап. Был яҙмамда баш ҡалабыҙ тураһында шәхсән үҙемдең фекерҙәр менән уртаҡлашҡым килә.

Беҙҙә халыҡ ихлас. Ярҙамсыл. Ышаныс бар бер-береһенә. Шулай булмаһа, автобустарҙа юл өсөн ингәс үк түгел, ә төшөр алдынан ғына иҫәпләшеүҙе нисек аңлатырға? Магнитогорск ҡалаһынан килгән танышым өсөн нәҡ ошо күренеш уны иң ныҡ аптыратҡаны булды. Юл буйына кемдеңдер түләмәйенсә ҡасып сығырын көтөп барҙы, ләкин бер кем дә бындай оятһыҙлыҡ күрһәтмәне.

Өфөлә таҙалыҡҡа иғтибар күп бүленә. 90-сы йылдар аҙағында, мәҫәлән, тимер юлы вокзалына трамвайҙа барғанда урамдағы бысраҡлыҡҡа иҫ китерлек ине. Хәҙер ул бөтөрөлдө. Әйткәндәй, шул уҡ тимер юлы вокзалы бинаһын да бөтөнләй үҙгәртеп ташланылар. Заманса, яҡты, әллә күпме кешене һыйҙырырлыҡ был бина миңә бик оҡшай. Ләкин платформалар ғына элекке заманда тороп ҡалғандай.

Хәҙер республиканан ситтә, хатта икенсе илдәрҙә юғары белем алыу модаға инде. Миңә ҡалһа, Өфөлә лә сифатлы, заман талаптарына яуап биргән һөнәргә эйә булырға мөмкин, сөнки беҙҙә төрлө уҡыу йорттары күп һәм улар яҡшы белем бирә.

Өфөлә миңә шуныһы оҡшай: ниндәй районды алып ҡараһаң да, бөтә нәмә ҡул аҫтында. Магазин, мәктәп, балалар баҡсаһы, китапхана, дарыухана, ғөмүмән, йәшәгән ереңдә эш тә тапһаң, әллә ҡайҙа йөрөргә лә кәрәкмәй. Яңы сафҡа ингән райондарҙа ла инфраструктура тиҙ үк барлыҡҡа килә.

Мин иртәнге һәм киске ваҡытты яратам. Бигерәк тә үҙәк баҙар тирәһендә ошо мәлдә барған тормошто күҙәтеү оҡшай. Барыһы ла ҡайҙалыр ашыға: эшкә, уҡыуға, башҡа йомоштары менән. Ҡала ҡайнай, йәшәй, тын ала. Ләкин Революцион һәм Цюрупа урамы сатындағы светофорҙың ғына водителдәр өсөн бик әҙ ваҡыт "биреүе" эсте бошора. Биш-алты машина үтеп ҡаламы юҡмы, оҙон машиналар колоннаһына тағы ла туҡтарға тура килә. Бәлки, ошо һорауҙы нисектер юлға һалыу сараһын күрерҙәр?

Яңы төҙөлгән йорттар бик күп. Йорт тапшырылып та өлгөрмәй, ә ихатала балалар өсөн махсус майҙансыҡтар ҡалҡып сыға. Был бик дөрөҫ аҙым. Ә бына Октябрь проспекты буйлап һәм элекке йорттар урынлашҡан башҡа урамдарҙа бының менән бәлә, сөнки күпселек урында майҙансыҡтар бөтөнләй юҡ. Идара итеүсе ойошмаларҙан үҙҙәренең ҡулы "аҫтында" булған йорттар алдына балалар өсөн махсус урындар булдырыуҙы талап иткәндә яҡшы булыр ине, тип уйлайым.

Туризмды үҫтереүгә ҙур иғтибар бүленә башланы. Ләкин Өфө урамдарының күбеһендә исемдәре, йорт номерҙары яҙылған алтаҡталар юҡ. Башҡорт милләтенән булған танышым "Урам, ойошма исемдәре башҡорт теленә хаталы итеп тәржемә  ителә", тип көйөнә. Минеңсә, ике дәүләт теле булған республиканың баш ҡалаһында бындай күренешкә урын булмаҫҡа тейеш. Яуаплыларға бер тапҡыр "һум" менән яза биргәндә, тиҙ үк дөрөҫләп ҡуйырҙар ине.

Беҙҙең ҡаланың фонтандары матур. Ҡала мәҙәниәт йорто янындағы фонтандың да тағы ла эшләй башлауын күреүҙән өмөтөмдө өҙмәйем. Ул әллә күпме кешенең тәүге ғаилә байрамы - туй тантанаһы - шаһиты булған йәмле урын, сөнки алыҫ түгел ЗАГС урынлашҡан.

Өфө - матур, йәшел, эшлекле, йәшәү һәм эшләү өсөн бөтә мөмкинлектәре лә булған баш ҡала. Уны һаҡлауҙы, матурлыҡта тотоуҙы әллә кемгә тапшырып ҡуймайыҡ, ә ҡулыбыҙҙан килгәнен эшләйек, хөрмәтле Өфө халҡы. Ул ситтән килгән ҡунаҡтар алдында күрһәтер йөҙөбөҙ, нәҡ Өфөгә ҡарап улар тотош республика тураһында фекер туплай.

**Павел ОСИПОВ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Ҡунаҡтарға, сит-яттарға Өфө тураһында ниҙәр һөйләр инең?

**(Башы 1-се биттә).**

***Рәмил ИШМӨХӘМӘТОВ, Өфө моторҙар эшләү берекмәһе эшсеһе:*** Ғәҙәттә, беҙ баш ҡалабыҙ хаҡында һүҙ сыҡҡанда уның тарихи һәм иҫтәлекле урындары, матур парктары, скверҙары, заманса архитектура буйынса төҙөлгән биналары - ғөмүмән, күберәк ҡаланың тышҡы күренештәрен генә күҙҙә тотабыҙ. Бер яҡтан, был дөрөҫтөр ҙә, сөнки Өфөлә ундай урындар бик күп. Мәҫәлән, музейҙарҙы ғына алайыҡ. Ғаиләм менән яңыраҡ "Музей төнө" үткәрелгәндә хатта иң-индәрен дә ҡарап сығып өлгөрмәнек, ҡыҙғаныҫҡа. Ә шулай ҙа беҙҙең Өфөнө бөтөнләй белмәгән кешеләргә, уның мәҙәни һәм тарихи урындарын ғына тасуирлап, һөйләп сығыу - ул бер ни ҙә һөйләмәү менән бер булыр ине, минеңсә, сөнки бындай урындар: музейҙар, парктар, фонтандар, театрҙар, һәйкәлдәр һ.б. бөтә ҡалаларҙың да мотлаҡ атрибутикаһы бит. Икенсенән, ҡаланың, ул ниндәй генә гүзәл булмаһын, фәҡәт тышҡы күренешен генә һүрәтләп, беҙ  уның эске донъяһын - кешеләр тормошон ситтә ҡалдырабыҙ. Үҙебеҙҙең ҡала хаҡында һөйләгәнде тыңлаған кешелә, ә был ҡалала ниндәй кешеләр йәшәй икән, улар ни менән шөғөлләнә һәм, ғөмүмән, ниндәйерәк кешеләр икән ул өфөләр, тигән һорау тыумай ҡалмайҙыр. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы: мин үҙем ситтә ҡунаҡ булғанда йә үҙебеҙгә килгән ҡунаҡтарға, Өфөнө тәүләп күргән йә ҡала хаҡында һорашҡан кешеләргә әлеге тышҡы атрибутика менән бер рәттән, үҙем бына хәҙер ике тиҫтә йыллап эшләп йөрөгән Өфө моторҙар эшләү берекмәһе хаҡында һөйләр инем, сөнки ҡайһы берәүҙәрҙән "Моторҙар эшләү һеҙгә ғүмерҙә лә тәтемәҫ ине, әгәр һуғыш йылдарында Өфөгә ситтән заводтар эвакуацияланмаһа..." тигәндәрен ишетеп ғәрләнгәнем бер тапҡыр ғына булманы. Ул кешеләр иплән кенә беҙҙең был предприятиеның тарихы менән ҡыҙыҡһынып ҡараһын ине, исмаһам. Өфөлә "Берләштерелгән двигатель төҙөү корпорацияһы" 1925 йылда уҡ ойошторола. Дөрөҫ, ул Рыбинскиҙың ваҡ авторемонт оҫтаханалары нигеҙендә барлыҡҡа килә, ләкин үҙаллы завод булараҡ, авиация моторҙары төҙөү эшенә 1928 йылдан ныҡлап тотона һәм ил буйынса 26-сы һанлы авиация сәнәғәте предприятиеһы булып документҡа инә. Дөрөҫ, Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, Өфө заводы майҙандарына әлеге Рыбинскиҙан, Ленинградтан, өлөшләтә Мәскәүҙән бер нисә завод һәм Воронеждан конструкторҙар бюроһы күсерелә, ләкин был Өфө моторҙар заводы 15 йыл буйы үҙаллы эшләгәндән һуң була. Бөгөн иһә Өфө моторҙар эшләү берекмәһе авиация двигателдәре етештереүсе ярайһы ҡеүәтле Рәсәй предприятиеһы иҫәпләнә, унда бөтәһе 24 меңдән ашыу кеше эшләй. Предприятие СУ төркөмө самолеттары өсөн сериялы рәүештә турбореактив двигателдәр, "Ка" һәм "Ми" вертолеттары өсөн узелдар һәм агрегаттар, шулай уҡ нефть һәм газ сәнәғәте ҡорамалдары етештерә, ремонт-сервис эштәрен башҡара. Бының менән әйтергә теләйем: Өфө - матур, йәшәү өсөн уңайлы ҡала ғына түгел, ил ҡеүәтенә лайыҡлы өлөш индереүсе эшселәр сафы булған заманса мегаполис та ул.

***Әлфиә СӘЙФУЛЛИНА, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты студенты:*** Атай-әсәйем ваҡытында ауылдан килеп, баш ҡалабыҙҙа юғары белем алғандан һуң, Өфөлә йәшәргә тороп ҡалған, сөнки атайым аспирантураға уҡырға ингән. Әсәйем Өфө мәктәптәренең береһендә уҡыта башлай һәм әле лә ошо эшендә, ә атайым техник фәндәр кандидаты, үҙ һөнәре өлкәһендә танылыу яулаған фән эшмәкәре. Уны эше буйынса бер нисә тапҡыр Мәскәүгә саҡырһалар ҙа, әсәйем менән бер һүҙле булып, Башҡортостанды ташлап китә алмайҙар. Шулай итеп, мин тәүге быуын өфөлө булам инде. Матур, ылыҡтырғыс ҡалалар һәм мегаполистар күп донъяла, ләкин минең өсөн иң яҡыны - тыуған Өфөм. Дуҫтарым менән йыш ҡына ошо нигеҙҙә бәхәс килеп тыуа. "Әгәр ниндәйҙер уңышҡа өлгәшәм, тиһәң, Өфөлә тороп ҡалма, ситкә сығып кит", - ти улар һәм ситтә йәшәп, эшләп йөрөүсе Земфира, Шевчук кеүек яҡташтарыбыҙҙы миҫал итеп килтерәләр. Эйе, сәнғәт, шоу-бизнес өлкәһендә уңышҡа өлгәшеүе еңел түгелдер, шулай ҙа мин тыуған ерендә, үҙ тамырҙарына ерегеп уңышҡа өлгәшкән һәм иленә хеҙмәт иткән шәхестәрҙе өлгө итеп ҡуям үҙемә. Шуға ла ситтән килгән ҡунаҡтарға, таныштарға, дуҫ-иштәргә лә тап ана шул үҙ ерендә үҙен тапҡан шәхестәребеҙ хаҡында һөйләр инем. Мәҫәлән, донъяға билдәле опера йондоҙҙары Аҫҡар менән Илдар Абдраҙаҡовтар, Лондон операһы солисткаһы Айгөл Әхмәтшина, һәләтле кинорежиссер Айнур Аҫҡаров кеүек яҡташтарыбыҙ ситтә эшләп ижад итһәләр ҙә Башҡортостан, Өфө менән бәйләнештәрен өҙгәндәре, Өфөнө онотҡандары юҡ. Тыуған сәхнәләренә йыш ҡайтып, яҡташтарын ҡабатланмаҫ таланттары менән һоҡландырып, ҡыуандырып китәләр. Республикабыҙҙа йәшәп ижад итеүселәр араһында ла дандары сит тарафтарға киң  таралған таланттар байтаҡ: Роберт Юлдашев, Зәйнетдин кеүек башҡарыусылар, "Арғымаҡ", "Йатаған", "Сал Урал", "Каруанһарай", "Дәрүиш Хан" кеүек этно-рок  һәм эстрада коллективтарыбыҙ һәм уларҙың мәрхәмәтлек эшмәкәрлектәре хаҡында һөйләр инем, сөнки Өфө ҡалаһын тап улар йөҙөндә танып-белеүҙәрен теләйем.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓Республика Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитетының рәсми төркөмдәрендә Берҙәм транспорт картаһы исеме өсөн тауыш биреүҙәрен һорайҙар. Тәҡдим ителгән варианттар араһында - "Арғымаҡ", "Ирәмәл", "Бал ҡорто", "Вusинка", "Толпар", ТЭТА.  BashCard ("Башҡорт арбаһы") алда бара. 10 июнгә тиклем тауыш бирергә була. Алдан хәбәр ителгәнсә, 1 июлдән республикала берҙәм транспорт картаһы индерелә. Шул ваҡыттан Өфөлә, Стәрлетамаҡта һәм Салауатта ҡала йәмәғәт транспорты һәм ҡала яны бәйләнеше маршруттарында ошо картаны файҙаланырға мөмкин.

✓Башҡортостанда 10 майҙан граждандарҙың урманға барыуы, шул иҫәптән транспорт менән инеүе тыйылғайны. Республиканың Урман хужалығы министрлығы бойороғо менән был тыйыу бөтөрөлдө. Ведомствола янғын хәүефе янаған осраҡта Башҡортостандың Урман хужалығы министрлығы ҡарамағындағы Төбәк диспетчер хеҙмәтенә (347) 218-14-14, тәүлек әйләнәһенә), Урман һағының берҙәм федераль номерына (8-800-100-94-00) шылтыратырға һәм урман янғыны сығанағын һүндереү буйынса мөмкин булған саралар күрергә кәрәклеген иҫкә төшөрҙөләр.

✓Башҡортостанда ата-әсә ҡарауынан ҡалған балалар тураһында мәғлүмәт биреүҙең административ регламенты раҫланды. Тәрбиәгә бала алырға теләгән Рәсәй граждандары, сит ил граждандары, шулай уҡ гражданлығы булмаған кешеләр төбәк мәғлүмәттәр банкынан Башҡортостан Мәғариф министрлығына мәғлүмәт һорап мөрәжәғәт итә ала. Улар мөрәжәғәт иткәндән һуң 10 көндән дә һуңға ҡалмайынса кәрәкле мәғлүмәттәр, махсус шарттар үтәлгән осраҡта, бала менән аралашыуға йүнәлтмә алырға тейеш. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостанда 13 мең етем бала йәшәй.

✓Башҡортостанда йәшәүселәрҙе тирә-яҡ мөхитте һаҡлау буйынса йәмәғәт инспекторҙары булырға саҡыралар. Был хаҡта республиканың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы иғлан итте. Йәмәғәт экология инспекторының төп бурысы - дәүләт күҙәтеү органдарына тәбиғәтте һаҡлау эшмәкәрлегендә бушлай ярҙам күрһәтеү. Ғариза һәм документтар Экология министрлығында ҡабул ителә. Адресы: Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 86, 230-сы бүлмә, тел:+7(347) 218-03-89.

**“БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.**

✓ *Салауат - мәғәнәһе яғынан да, ошо исемдә данға күмгән батырыбыҙ булғаны өсөн дә бик ҡәҙерле беҙгә. Ошо олуғ исемдә ваҡламайыраҡ, уның ҡәҙерен һаҡлабыраҡ йәшәһәк ине. Ҡыйыулыҡ, рухи юғарылыҡ, илһөйәрлек өлгөһө бит ул!*



*УЙЛЫҒА - УЙ*

**Башҡорт хәтерендә һис бер ҡасан юйылмаҫ исемдәр йәшәй, улар ил батырҙарының исемдәре - халҡыбыҙ тарихын шул исемдәр данлап-ҙурлап тора ла инде. Әхмәтзәки Вәлиди, 1923 йылдың февралендә Ашхабад ҡалаһында яҙылған һәм "Башҡорт халҡына хушлашыу хаты" тип аталған мөрәжәғәтендә ошо хаҡта былай тип әйтә: "Беҙ башҡарған эштәр Кесе Солтан, уның улы Морат Солтан, Бишәй Солтан, уның улы Ырыҫмөхәммәт Солтан, Солтангәрәй (Ҡараһаҡал), Батырша, Салауат, Аблай һәм Кинесары хаҡындағы хәҙистәр кеүек бөйөк хәтирәләр йәшәтәсәк". Ил батырҙары эшмәкәрлеген хәҙистәргә тиңләү һис осраҡлы түгелдер: тыуған еребеҙ, ирекле һәм хоҡуҡи дәүләтселегебеҙ өсөн йәндәрен фиҙа ҡылыусылар дин юлындағы хәҡикәтте кеше күңеленә һалыусылар менән берҙәй данлылыр. Мәле еткәс, батыр даны бар донъяға тарала, уның исеме тыуған иленә, ғәзиз халҡына мәртәбә өҫтәй.**

# САЛАУАТЛЫ, ТИМӘК, ДОҒАЛЫ ИЛ

## Батырыбыҙҙың тыуына - 265 йыл



Йыл һайын йәмле йәй башында беҙ, тарихи хәтеребеҙҙе яңыртып, Салауат батыр көндәрен уҙғарабыҙ. Бөгөн Салауат батыр, тиһәләр, сал Уралыбыҙ, гүзәл Башҡортостаныбыҙ күҙ алдына килә. Башҡа илдәр, башҡа халыҡтар ҙа ошо исемде иң элгәре тик башҡорт иле менән бәйләп ҡабул итә. 2012 йылдың август айында беҙ, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының яу юлдары буйлап сәйәхәт ҡылыусы бер төркөм башҡорттар, ҡайтып барышлай Прага ҡалаһында туҡталып, тамаҡ ялғап алырға булдыҡ. Кафела эшләүсе чех егете ҡайҙан килеүебеҙҙе һорашты. Беҙ, Өфө ҡалаһынан, тигәс, ул шунда уҡ: "О, Салават Юлаев!" - тип яуапланы. Беҙҙең, 25 көн буйына дауам иткән автосәйәхәттә арып-талсығып бөткән юлсыларҙың, нисек итеп ихлас шатланғанын күрһәгеҙ ине шул саҡта!

Миңә ҡайһы саҡта Салауат батырыбыҙҙың исеме күктәрҙән төшөрөлгәндер ҙә, уның киләсәктәге булмышына, маңлайына яҙылған яҙмыш-бурысына тап килтереп, әле ошо хаҡта бер ни белмәгән-һиҙмәгән атаәсәһе тарафынан ҡушылғандыр кеүек тойола. Әҙәм балаһына исем ҡушыу тик башҡаларҙан айырып ҡарау өсөн атама биреү генә түгелдер - кеше йәненә йәм-ғәм дә өҫтәүҙер ул. Салауат исеменең килеп сығышы ла Ислам дине менән бермәбер бәйле бит: ғәрәп телендә ошо һүҙ Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үәссәләм) бәйғәмбәребеҙгә ҡарата маҡтау-данлау, Аллаһы Тәғәләнән уға фатиха һорау доғаһын аңлата бит. Тимәк, Салауат исемен иҫкә алып, уны ҡат-ҡат ҡабатлап, беҙ бер үк ваҡытта үҙебеҙҙең Мөхәммәт өммәтенән булыуыбыҙҙы иҫебеҙгә төшөрәбеҙ, һәм ошо исем һәр кемебеҙгә үҙ иманыңа тоғро ҡалыу, милләттәш-өммәттәштәреңә терәк-таяныс булыу, бәлә-ҡаза килгәнендә лә ныҡ тороу, өмөтһөҙлөккә бирелмәү кеүек юғары сифаттарҙы өлгө итеп йәшәү тураһында иҫкәртеп торалыр ул.

Салауат - ул исем генә түгел. Ул башҡорт тарихында бар булды, әммә ихтилалдан һуң дауам иткән мең ғазаплы тормошо ла, аяуһыҙ яҙмышы һәм сит-ят ерҙәге үлеме лә уны халҡынан айыра алманы - ул тыуған иленә йыр-бәйеттәр, легенда-риүәйәттәр, шиғыр-поэмалар, хикәйәләр һәм романдар, драмалар һәм кинофильмдар, район һәм ҡала исемдәре булып кире ҡайтты. Ағиҙелдең текә ярындағы мәғрур һын-һәйкәл янына килеүселәр ҙә: "Беҙ әле Салауат янына барып киләбеҙ", - тип хәбәрләшә. Йәйге йылы ямғырҙар яуғанында ла бала-саға ғына түгел, үҙебеҙ ҙә күк көмбәҙен нурландырып төшкән йәйғорға ҡарап: "Ана, ниндәй матур булып, ергә Салауат күпере төшкән", - тип һоҡланабыҙ. Әйтерһең дә, күктәрҙәге алыҫ йәндәр иленән Салауатыбыҙ үҙе шул рәүешле беҙгә, үҙ халҡының бөгөнгө вариҫтарына, һағынышлы сәләмдәрен ебәрә, тарихты бөгөнгөгә ялғаусы нур-хәтер күпере аша күңелдәребеҙҙә яҡты өмөттәр уята.

Салауат исемен кәмһетергә, уны оло юлда кеше талап, вәхшилек ҡылыусы юлбаҫарға тиңләп баһаларға маташыусы мәкерле әҙәмдәр ҙә юҡ түгел әле Рәсәйҙә. Салауатты хурлап, яугирлығы, көслө ихтыяры, ҡаҡшамаҫ рухы менән дан алған, намыҫына һис тап төшөрмәҫ башҡортто яуапһыҙ-телһеҙ итеп күрергә теләй улар. Тик тарихи хәҡикәтте бысраҡ менән буяп, йәшереп булмай: бындай әшәке әҙәмдәр үҙ нәжестәренә үҙҙәре бата.

Йәнә шул: Салауат - мәғәнәһе яғынан да, ошо исемдә данға күмгән батырыбыҙ булғаны өсөн дә бик ҡәҙерле беҙгә. Ошо олуғ исемдә ваҡламайыраҡ, уның ҡәҙерен һаҡлабыраҡ йәшәһәк ине. Ҡыйыулыҡ, ғәйрәтлелек, рухи юғарылыҡ, илһөйәрлек өлгөһө бит ул! Юғиһә, һуңғы йылдарҙа батырыбыҙ исемендәге дәүләт премияларына, уның исемендәге орденға лайыҡ булыусыларҙың барыһына ла ошондай сифаттар хас, тип әйтеү ысынбарлыҡҡа тап килмәҫ кеүек.

"Үткәндәргә - салауат!" тигән боронғолар. Эйе, тарихыбыҙҙы ҙурлай ҙа, маҡтай ҙа, данлай ҙа алабыҙ: Салауат батыр кеүек данлы шәхестәребеҙ күп булған, улар киләсәктә лә тыуасаҡ. Халҡыбыҙ өсөн яҡты яҙмыш теләп, салауат доғаларын уҡып, булмышыбыҙҙы ла, йәшәйешебеҙҙе лә яҡшырта алырлыҡ көскә эйә халыҡбыҙ беҙ.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

*ПАРАДОКС*

# ИСЕМ КЕШЕ БИҘӘГЕМЕ?

## Юҡ, милләт тамғаһы ла!

**Гәзитегеҙҙә исемдәргә бәйле мәҡәләләр әленән-әле баҫылып тора. Өфө ҡалаһында йәшәүсе халҡыбыҙҙың боронғо исем-шәрифтәрен йөрөтөүсе ҡыҙҙарҙың һәм малайҙарҙың фотолары баҫылыуы ла был баҫманы биҙәй. Шул юҫыкта әйтерлек бер нисә һүҙем бар.**

Халыҡ араһында таралып киткән Альбина, Радик, Вадим, Эльвина кеүек исемдәр тураһында күп яҙылды. Әммә ошондай исемдәрҙән ҡотолоу маҡсатында ата-әсәләрҙең, балаларына боронғо исемдәр ҡушабыҙ, тигән изге теләк менән беҙҙең халыҡҡа бөтөнләй ят булған исем ҡушып ҡуйыуына ла күҙ йомоп ҡарарға ярамай. Шәхсән билдәле булған бер нисә миҫал килтереп китәйем: бер йырсы егет улына Аслан тигән чечен исеме биргән. Чечендар үҙҙәре малайҙарына Юлай йә Урал тигән исем ҡушамы икән, шул егеттән һорашырға ине. Башҡорттар араһында киң таралған Руслан да шул Ҡафтау халыҡтары исеме бит.

Өс бала әсәһе булған бер йырсы бер улын Шаһнәзир тип атаған. Бынығы инде фарсы ҡәүеме исеме. Тағы ла бер йырсының Тигран атлы вариҫы барлығы хаҡында ишеттем. Тигран тиранға ауаздаш, шулай булғас, беҙгә нишләп балаларыбыҙға бөйөк баҫып алыусыларҙың исемдәрен Бонапарт йә Адольф менән тулыландырмаҫҡа?

Парадоксмы? Парадокс... Ни хәл был? Был хәл ата-әсәләрҙең тарихи наҙанлығынан, әллә үҙ милләтенән оялыуынан киләме? Икеһе лә барҙыр. Ә бит исем хәҙерге ваҡытта, бигерәк тә паспорттарҙан милләт графаһы алып ташланған ваҡытта, кешенең милләтен танытыусы берҙән-бер күрһәткес булып тора. Элек тә бит, паспорттар булмаған саҡта ла, кешенең исем-шәрифенә ҡарап, милләтен билдәләгәндәр. Беҙ хәҙер үҙебеҙҙең милләтте тышҡы яҡтан белдереүсе берҙән-бер саранан баш тартабыҙ түгелме?

Паспорттарҙан милләт графаһын алып ташлау күп кенә милләттәштәребеҙгә үҙ-үҙен таныуҙа һәм танытыуҙа ҡыйынлыҡтар тыуҙыра икән, тимәк, балаларыбыҙға башҡортса яңғырашлы исемдәрҙе ҡушыу кәрәк. Икенсенән, башҡа телдәрҙән ингән исемдәр ҡушылыуында ҡатнаш никахтар ҙа сәбәпсе (атай менән әсәй кеше ике милләткә лә уртаҡ яңғырашлы исем ҡушырға тырыша), шуға күрә республикабыҙҙа "Башҡорт исеме культы" тыуҙырыу фарыз. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

**Рушан ХӘСӘНОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостандың Хәйбулла районында Тимерхан Хәкимовтың крәҫтиән (фермер) хужалығында сыр ҡайнатыу цехы асылды. Бында ярым ҡаты, шулай уҡ ҡаты сырҙар етештереү күҙаллана. Әлеге ваҡытта бында ҡаты сырҙың дүрт төрөн әҙерләйҙәр. Һөттө башҡа фермер хужалыҡтарынан һатып алалар. Уны эшкәртеү ҡеүәте әлегә тәүлегенә 500 литр тәшкил итә. Киләсәктә хужалыҡ һөт ризыҡтарының икенсе төрҙәрен, мәҫәлән, кефир һәм ряженка етештерергә ниәтләй. Тимерхан Хәкимов үҙенең сыр ҡайнатыу цехын асҡанға тиклем Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендәге һәм сит илдәрҙәге сыр яһаусыларҙың тәжрибәһен өйрәнгән, уны өй шарттарында ла эшләп ҡараған.

✓ Башҡортостанда "Торлаҡ һәм ҡала мөхите" милли проекты сиктәрендә 2 500-ҙән ашыу кеше авариялы торлаҡ фондынан күсерелә, тип белдерҙеләр Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитетының матбуғат хеҙмәтендә. 2019-2024 йылдарҙа граждандарҙы авариялы торлаҡ фондынан күсереү адреслы программаһы мохтаж ғаиләләргә 923 фатир бүлергә мөмкинлек бирергә тейеш. Әлеге программаға Өфө, Бәләбәй, Белорет, Дүртөйлө, Күмертау, Яңауыл ҡалалары, Баҡалы, Оло Ыҡтамаҡ, Үрге Йәркәй, Ҡариҙел, Ҡарман, Ҡырмыҫҡалы, Краснохолм, Ҡырғыҙ-Миәкә, Мишкә, Прогресс, Приют, Глуховской шифаханаһы, Семилетка, Иҫке Балтас, Сурай ауылдары индерелә.

✓ "Берҙәмлек" Халыҡ-ара милли мәҙәниәттәр фестивале 12 июндә Өфөлә ҙур Гала-концерт менән тамамланасаҡ. Белоруссия, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Сербия, Көньяҡ Корея, Сенегал, Чили, Македония, Берләштерелгән Ғәрәп Әмирлегенән һәм башҡа илдәрҙән килгән 10 ижади коллектив уға тиклем республиканың Әлшәй һәм Благовар районында буласаҡ, һабантуйҙарҙа ҡатнашасаҡ. Быйыл беренсе тапҡыр фестиваль сиктәрендә Этнокөн уҙғарыу ҙа ҡаралған.

✓ 7-9 июндә Башҡортостандың баш ҡалаһы икенсе йыл рәттән Милләттәр лигаһы волейбол халыҡ-ара турнирының Рәсәй этабын ҡабул итә. Өфөгә Рәсәй, Италия, АҠШ һәм Португалия йыйылмалары килде. Был юлы ҡатнашыусыларҙың составы, Халыҡ-ара волейбол федерацияһы рейтингына ярашлы, көслөрәк. Хәбәр ителеүенсә, 2022 йылда Өфө волейбол буйынса донъя чемпионатын ҡабул итә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҠЫҪҠАСА

# ТАҒЫ БЕР ЯРҘАМ

✓ **Башҡортостан властары ауыл халкына газ үткәргестәргә тоташыуға субсидиялар йәки сертификаттар бүлергә ниәтләй.** Улар ғаиләләргә сығымдың бер өлөшөн ҡапларға тейеш. Республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә ошо хаҡта белдерҙе. "Беҙ ауылдарға газ индерәбеҙ, ә халыҡ тоташа алмай, сөнки хаҡы - 100 мең һумдан ашыу. Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендәге тәжрибә менән танышып сыҡтыҡ. Мохтаждарға ошо эштәрҙе башҡарыуға субсидия йәки сертификат рәүешендә ярҙам күрһәтергә әҙербеҙ", - тип билдәләне төбәк етәксеһе. Әлеге ваҡытта Хөкүмәт ихаталар буйлап тикшереүҙәр уҙғарылған муниципалитеттарҙан мәғлүмәт йыя. Яҡынса 3,5 мең хужалыҡ ошо льготанан файҙаланырға әҙер булыуын белдергән дә инде. Республиканың Хеҙмәт министрлығы субсидиялар биреү тәртибен һәм уларҙы алырға хоҡуҡлы граждандар категорияларын исемлеген әҙерләй.

✓ **Һуңғы биш йылда республикала 463 кеше һыуға батып үлгән, улар араһында 49 бала бар.** Республиканың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты етәксеһе Фәрит Ғүмәров һыҙҙәренсә, һыуға батыусыларҙың күпселеге - Мәләүез, Учалы һәм Белорет районында. Статистикаға ярашлы, 47 процент - күлдә, карьерҙа, быуала һәм һыу һаҡлағыста, ә 53 проценты йылғала һәләк булған. Республикала һәләк булған һәр алтынсы кеше Ағиҙел йылғаһында батҡан. Һыуҙа үлем осраҡтарының төп сәбәптәре араһында: йыһазландырылмаған урындарҙа, эскән килеш һәм өлкәндәрһеҙ һыу инеү. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров районды йыһазландырылған пляждар менән тәьмин итмәгән муниципалитет етәкселәрен билдәләүҙәрен һәм һыуҙа үлем осраҡтарының һаны буйынса тәүге урында торған муниципалитеттарҙа кешеләрҙең һәләк булыу сәбәптәрен асыҡлауҙарын һораны.

✓ **Июндә Башҡортостанда уртаса һауа температураһы нормаға ярашлы, 16-18 градус була.** Яуым-төшөм 70 миллиметрҙан артмай. Шуның менән бергә июндең беренсе декадаһында ҡайһы бер көндәрҙә төндә 0, -2 градусҡаса һалҡынайтып, ҡырау төшөүе көтөлә. Башгидрометүҙәк начальнигы Вилора Горохольская Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә йәйҙең тәүге айы тоторокһоҙ буласағы тураһында һөйләне. "Койма ямғыр, елдең көсәйеүе, боҙ-борсаҡ, йәшен көтөлә. Аҙнаның тәүге яртыһында һауа температураһы +4 градусҡа тиклем түбәнәйә. Июндең икенсе яртыһында температураның +26-31 градусҡаса күтәрелеүе мөмкин", - тип билдәләне республиканың баш синоптигы. Июль һәм август айҙарында ла температура уртаса күп йыллыҡ күрһәткестәргә яҡын. Июлдә яуым-төшөмдөң - норманан күберәк, августа нормаға ярашлы булыуы көтөлә. Ағиҙел һәм Өфө йылғаларында һыуҙың иң юғары температураһы 22,8 һәм 21,8 градусҡа етергә тейеш. Әле һыуҙың йылылығы - 15 градус тирәһе.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ШҮЛГӘНТАШҠА СӘФӘР

**Радий Хәбировтың Бөрйән районына эш сәфәре бар донъяға билдәле Шүлгәнташ мәмерйәһенә экскурсия менән тамамланды. Унан алда республика етәксеһе мәмерйәнең үҙенсәлекле палеолит осоро рәсемдәрен һаҡлауға һәм төбәккә туристарҙы йәлеп итеүгә йүнәлтелгән шул уҡ исемдәге тарихи-мәҙәни комплекстың төҙөлөшө менән танышты.**



Музей Ласко, Шове, Руфиньяк, Франциялағы Арси-сюр-Кюр, Испаниялағы Альтамира мәмерйәләре янындағы башҡа комплекстарға оҡшатып эшләнә. Проект буйынса, музей өс ҡатлы була, дөйөм майҙаны - 4 мең квадрат метрҙан ашыу. Бында Шүлгәнташ мәмерйәһенең дүрт залындағы ҡаяға төшөрөлгән һүрәттәрҙең факсимилеһы булырға тейеш. Билдәләнеүенсә, был музей ғына түгел, ә ҙур ғилми-тикшеренеү, мәғариф һәм этномәҙәни үҙәк буласаҡ. Шүлгәнташ мәмерйәһендә Радий Хәбиров бер нисә, шул иҫәптән туристар өсөн ябыҡ залдарҙы ҡараны. Башҡортостан етәксеһенә бөтә донъяла уникаль һаналған рәсемдәрҙе һаҡлап ҡалыу өсөн ниндәй эштәр алып барыуҙары, ниндәй саралар күреүҙәре хаҡында һөйләнеләр. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, республика Шүлгәнташ мәмерйәһен ЮНЕСКО-ның Бөтә донъя мираҫы исемлегенә индереүгә ғариза бирҙе. Мәмерйә барлыҡ экологик нормалар үтәлгән ҡурсаулыҡ биләмәһендә урынлашҡан. "Әле беҙ туристар өсөн инфраструктура булдырыу буйынса эш алып барабыҙ. Улар яҡшы, уңайлы шарттарҙа йәшәргә тейеш. Был Бөрйән районының иҡтисады өсөн дә мөһим. Киләһе йылда ошо эштең тәүге этабын тамамларбыҙ тип ышанам. Уникаль һүрәттәрҙе һаҡламау енәйәт булыр ине. Күҙ алдына килтерәһегеҙме, был картиналар 20 мең йыл торған, һәм беҙҙең бурысыбыҙ - уларҙы һаҡлау", - тине Радий Хәбиров, журналистарҙың һорауҙарына яуап биреп. Республика етәксеһе ҡаяға төшөрөлгән рәсемдәргә, ғалимдарҙан тыш, бер кемде лә яҡын юлатмауҙарын, яҡын киләсәктә шулай буласағын белдерҙе.

# АҒИҘЕЛ БУЙЫНДА...

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Ағиҙел йылғаһы ярында алып барылған төҙөлөш эштәре барышы менән танышты.**

Бында реконструкция эштәре 2014 йылдан алып барыла. Быйыл Ағиҙел йылғаһы буйында төҙөлгән гидротехник ҡоролмаларҙың бөтә дүрт сираты ла файҙаланыуға тапшырыла. Тимер юл күперенән Ағиҙел урамына тиклем реконструкция эштәре алып барылған яр буйының дөйөм оҙонлоғо 5 саҡрым тәшкил итә. "Йәшлек" спорт һауыҡтырыу комплексынан автомобиль күперенә тиклемге участка төҙөкләндерелгән, унда йөрөргә мөмкин. Хәҙер ошо участкаһың өҫкө өлөшөндә автомобиль юлына асфальт, тротуар плиткаһы түшәү, йүгереү һәм велосипед юлдары һалыу кеүек эштәр башҡарыла. Эштәр 1 июлгә тамамлана. Дуҫлыҡ монументы янында автомобиль юлы төҙөлә башланы, ул ағымдағы йылдың 30 июленә тапшырылырға тейеш. Шулай уҡ быйыл Салауат Юлаев проспекты һәм Зәки Вәлиди урамы киҫелешендәге транспорт сиселешен төҙөкләндерә башлау күҙаллана. Дуҫлыҡ монументы яғында Сочи урамы аҫтында йәйәүлеләр үткәүелен төҙөү башланған. Салауат Юлаев проспектында 121 метр оҙонлоктағы ер аҫты үткәүеленә ла капиталь ремонт үткәреләсәк. Радий Фәрит улына Салауат Юлаев һәйкәле ҡуйылған тау итәгендәге амфитеатрҙы күрһәттеләр. Асыҡ концерт майҙансығы 1260 урынға иҫәпләнгән. Әле төҙөлөш эштәре бара, сәхнә ҡорола. Радий Хәбиров иғтибарын амфитеатр тамашасыларға ла, музыканттарға ла уңайлы булһын өсөн уның бөтә элементтарын уйлау кәрәклегенә йүнәлтте.

# КӨРӘШ СПОРТЫ

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров "Фейсбук"тағы сәхифәһендә Өфөнөң Октябрь районы Глумилин биҫтәһендә халыҡ-ара спорт көрәше үҙәген төҙөү пландары менән уртаҡлашты.**

"Республикала спорт көрәшенең ныҡ үҫешкәнлеген күптәрегеҙ белә. Тиҫтәләрсә мең балалар һәм өлкәндәр уның менән мауыға, беҙҙә бик күп клубтар һәм секциялар, төрлө кимәлдәге ярыштарҙа байтаҡ еңеүҙәр... Ләкин беҙҙә көрәш өсөн заманса спорт ҡоролмаһы юҡ. Шуға күрә Өфөнөң Октябрь районы Глумилин биҫтәһендә халыҡ-ара спорт көрәше үҙәген төҙөргә ниәтләйбеҙ", - тип яҙҙы республика етәксеһе. Проект универсаль спорт-концерт залы, ҙур майҙансыҡ (32х62 м) һәм 3400 урынлыҡ амфитеатр, шулай уҡ тренажер, тамашалар һәм көрәш залы менән халыҡ-ара, Рәсәй ярыштары өсөн спорт комплексын төҙөүҙе күҙ уңында тота. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ағымдағы йылдың мартында Рәсәй президенты Владимир Путин Физик культураны һәм спортты үҫтереү советы ултырышы йомғаҡтары буйынса йөкләмәләр исемлеген раҫланы. Документ бик күп мәсьәләләрҙе үҙ эсенә ала. Атап әйткәндә, Президент физик культураны һәм спортты үҫтереү сараларын "Демография", "Һаулыҡ һаҡлау", "Мәғариф", "Торлаҡ һәм ҡала мөхите" һәм "Фән" йүнәлештәре буйынса милли проекттар паспортына индерергә ҡушты. Был саралар спорт резервы әҙерләгә төбәк үҙәктәрен булдырыуға һәм үҫтереүгә, уҡыусылар, шулай уҡ өлкән йәштәгеләр араһында физик культураны һәм спортты популярлаштырыуға булышлыҡ итергә тейеш.

# ТАҒЫ БЕР ЯЛ УРЫНЫ

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Белорет районында "Морат" тау саңғыһы курортын үҫтереү өсөн инвестор табылыуы тураһында хәбәр итте.**

"Беҙ "Морат"ҡа инвестор таптыҡ - ул илдә киң билдәле "Баҡса ҡулсаһы" компанияһы. Был Европалағы кеүек курорт була. Өс-дүрт йылдан бында трассаларҙың һаны һәм оҙонлоғо ике тапҡырға артыр. Туристарҙы йәлеп итеү нөктәләре асылыр, ә иң мөһиме - республика иҡтисадына өҫтәмә алты миллиард һум самаһы аҡса килер", - тип яҙҙы Радий Хәбиров "Фейсбук"тағы сәхифәһендә. Курортҡа килеүселәр һанын йылына 70 мең кешенән 500 меңгә тиклем арттырыу күҙаллана. "Морат" курортын үҫтереү планы шулай уҡ 50 коттедж, 945 апартамент, 15 дөйөм туҡланыу нөктәһе, өс ресторан, 50 коммерция инфраструктураһы объектын, шул иҫәптән балалар үҙәген, магазиндар, дарыухана, прокат, химик таҙартыу пунктын төҙөүҙе күҙ уңында тота. Быннан тыш, яҡын киләсәктә Мораттта картинг, панда-парк, һауыҡтырыу комплексы, тау саңғыһы велосипедтары өсөн юлдар, экотерапия һәм скандинавса йөрөү өсөн трассалар, һыбай йөрөү өсөн маршруттар асыла. Башҡортостан етәксеһе билдәләүенсә, республика биләмәләрҙе үҫтереү өсөн башҡа мөһим проекттарға ла инвесторҙарҙың килеүен көтә һәм "мөмкин тиклем күберәк ярҙам күрһәтергә" әҙерлеген белдерҙе. Һүҙ, тәү сиратта, Бөрйән кластерын, "Янғантау" һәм "Торатау" геопарктарын үҫтереү хаҡында бара.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө ҡала Советы депутаттары 2018 йылдағы килеме тураһында отчет бирҙе. 34 депутаттан иң бай өсөү иҫәбендә - Артур Хажиғәлиев, Андрей Носков һәм Кирилл Бадиков. Былтыр эшҡыуар Артур Хажиғәлиевтың килеме 204,74 миллион һум тәшкил иткән. ПСК-6 компаниялар төркөмө етәксеһе Андрей Носков 164,96 миллион һумлыҡ килеме тураһында отчет биргән. "Өфө ҡала ипотека кредитлау агентлығы" акционерҙар йәмғиәте башлығы Кирилл Бадиков бер йылда 146 миллион һум аҡса эшләгән.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһы аэропорты Мостай Кәрим исемендәге "Өфө" аэропорты тип үҙгәртелә. Рәсәй Президенты Владимир Путиндың тейешле указы 31 майҙа рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылды. "Рәсәйҙең бөйөк исемдәре" проекты сиктәрендә халыҡтың тауыш биреү йомғаҡтары буйынса хәҙер 44 төбәк аэропорты күренекле ватандаштарыбыҙҙың исемен йөрөтә. Әйтәйек, Ҡазан аэропорты - татар халыҡ шағиры Ғабдулла Туҡай, Мәскәүҙең "Шереметьево", "Домодедово", "Внуково" һауа ҡапҡалары хәҙер Пушкин, Ломоносов һәм Туполев тип атала.

✓2022 йылда Рәсәйҙең һиғеҙ ҡалаһы волейбол буйынса донъя чемпионатын ҡабул итә. Улар араһында Өфө лә бар. Турнир 2022 йылдың 26 августынан 11 сентябренә тиклем дауам итә һәм дүрт этапҡа бүленә. Алдағы өс йылда Өфөлә волейбол үҙәге төҙөлә. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров объекттың проектын өфөләр ҡарамағына тикшереүгә сығарҙы.

✓Башҡортостан ҡала яны пассажирҙар компанияһы ойоштурған "Билет һатып ал, велосипедыңды бушлай йөрөт" акцияһы барышында ҡала яны поездары пассажирҙары төбәк биләмәһендә 1 июндән 31 октябргә тиклем электричкала велосипедтарын бушлай йөрөтә ала. Багаж өсөн документтар тултырырға кәрәкмәй. Былтыр 2000-дән ашыу пассажир ошо мөмкинлектән файҙаланған.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Мәктәпкәсә йәштәге балалар һүрәт төшөрөү, аппликация яһау, талантттар ярышында ҡатнашты. Уҡыусыларҙы ҡул көрәше, уҡ атыу ҡыҙыҡһындырҙы, шахмат, шашка, төрлө ҡул эштәре серҙәренә төшөнөргә теләүселәр ҙә күп булды.*



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БАЛА КҮҢЕЛЕН КҮРЕП...



**Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнө уңайынан баш ҡалала ике көн дауамында "Өфө - балалар өсөн ҡала" тигән күмәк уйын-көлкө саралары ойошторолдо. Шул сиктәрҙә Салауат Юлаев майҙанында Өфө ҡала округы хакимиәтенең мәғариф идаралығы тарафынан әҙерләнгән егерменән ашыу тематик майҙансыҡта балалар һабантуйы үтте.**

Балалар һабантуйында кескәй ҡунаҡтарҙы һәм уларҙың ата-әсәләрен әкиәт геройҙары сәләмләп ҡаршы алып торҙо. Артабан ҡала халҡын байрамдың төп тамашаһы, "Тамыр" балалар телеканалының йәш таланттары һәм Өфө ҡалаһының төрлө йырбейеү ансамблдәре ҡатнашлығындағы концерт көтә ине. Салауат Юлаев майҙаны аллеяһы башланған ерҙән ике яҡлап рәтрәт булып күргәҙмәләр, уйынкөлкө ойоштороусы майҙансыҡтар теҙелгәйне. Был эштә Өфөнөң һәр районындағы өсәтәлмә белем биреү учреждениелары, йәкшәмбе һәм спорт мәктәптәре ҡатнашты. Балалар яратҡан әкиәт геройҙары менән аралашты, фотоға төштө, төрлө уйындарҙы һәм оҫталыҡ дәрестәрен ҡараны. Мәҫәлән, спорт майҙансығында үҙенде яҡлау ысулдарын өйрәнеп була ине, унан тыш "Ағас һырлау", "Керамикаға һүрәт төшөрөү", "Дингеҙ уйынсыҡтары", "Таҫма техникаһы" тигән оҫталыҡ дәрестәре булды. Спорт менән дуҫ булғандар "ГТО" Бөтә Рәсәй комплексы һынауҙарын үтеп ҡараны. Мәктәпкәсә йәштәге балалар һүрәт төшөрөү, аппликация яһау, таланттар ярышында ихлас ҡатнашты. Уҡыусыларҙы ҡул көрәше, уҡ атыу ҡыҙыҡһындырҙы, шахмат, шашка, төрлө ҡул эштәре серҙәренә төшөнөргә теләүселәр ҙә күп булды.

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты эргәһендәге ата-әсәләр комиссияһы ойошторған майҙансыҡта балаларға балаҫ һуғып ҡарау, уйынсыҡ уҡтан атыу, ҡул көрәштереү, селтәр тегеү, башҡорт халыҡ кейемдәренә аппликация эшләү һәм буямдарҙы буяу, асыҡ микрофон, футболкаларҙы махсус буяу менән башҡортса нағышлау тәҡдим ителде, төрлө уйындар уйнатылды. "Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнөнә арналған масштаблы сарала беренсе тапҡыр ҡатнашабыҙ, элек башҡортса бындай махсус ойошторолған айырым майҙансыҡ булмай торғайны. Беҙ битараф булмаған ата-әсәләрҙе, йәмәғәт ойошмаларын, мәғариф учреждениелары хеҙмәткәрҙәрен йәлеп итеп, башҡорт балаларында туған телгә ҡарата һөйөү, рух тәрбиәләү, милли йолалар менән таныштырыу маҡсатын тормошҡа ашырабыҙ. Әлегә балалар бик әүҙем: майҙансыҡтың бөтә уйындарында ҡатнашып, ҡулдарына төшкән тәнкәләрҙе алдан әҙерләп ҡуйған тәмлекәстәргә, башҡортса буям, китап, значоктарға алмашып китәләр", - тине ойоштороусыларҙың береһе Айгөл Атанова.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Баш ҡала балаларының йәйге каникулдары бына шундай күңелле байрамдан матур тәьҫораттар һәм оҫталыҡтарын арттырыуҙан башланып китте. Балаларҙың үҙҙәре менән әңгәмәләшкәндә байрамды бик оҡшатыуҙары тураһында ғына һөйләнеләр, ҡәнәғәтһеҙлек белдергән һис кем булманы. Уларҙың ялын, имендереп, күңелен ҡайғыртып торған ойоштороусылар эшенә ошонан да оло баһа юҡтыр.**

**Камилә ҒӘЛИЕВА.**

БАШ ҠАЛАМ



**Республиканың баш ҡалаһын иҫем китеп яратам, тип әйтә алмайым, ләкин ул минең күңелемә иң яҡын урындарҙың береһе. Ғөмүмән, ҡайнап торған ҡала менән өсөн түгел, шуға күрә тыныс тормошло ауылда йәшәйем. Тик 50 әйлә ауылымдан бөтөнләй сыҡмай ятмайым, сөнки ул-был эштәр менән Өфөгә йыш юлланырға тура килә. Шуға күрә Өфө хаҡында үҙемдең фекерҙәрем менән бүлешкем килә.**

## ҮҘГӘРЕШТӘР ҠЫУАНДЫРА ЛА УЛ...

Иң тәүҙә күҙгә, әлбиттә, баш ҡалаға килеп ингән урын ташлана. Мин, мәҫәлән, Затон биҫтәһе яғынан Өфөгә киләм һәм һуңғы ваҡытта был яҡта булған үҙгәрештәр тик ҡыуандыра ғына. Ағиҙел йылғаһы аша асылған яңы күпер, уға тиклемге юлдарҙың төҙәкләндерелеүе күптәрҙең күңеленә хуш килгәндер, тием.

Йәйге миҙгелдә "Трамплин" спорт үҙәгендәге фуникулерға ултырып йылғаға төшөү мөмкинлеге бөтә Өфө халҡы һәм ҡала ҡунаҡтары өсөн ял итеүҙең бер төрө. Ағиҙелгә төшкәс, йылға ярында йөрөргә йәки паромға ултырып, икенсе ярға сығырға мөмкин. Был иһә гөрләп торған ҡаланан тыныс ауылға барып сығыуға тиң. Рәхәтләнеп ял итеп, тыныс һауа һулап ҡайтырға була.

Балалар менән ҡалаға килгәндә уларҙы мотлаҡ "Урмансылар паркы"ндағы зоопаркка алып барам. Ғөмүмән, был паркта йөрөү бик оҡшай. Һуңғы йылдарҙа ундағы үҙгәрештәрҙе тик ыңғай яҡтан ғына баһаларға мөмкин: актив уйындар өсөн төрлө майҙансыҡтар булдырыу, ҙур ғына балалар майҙансығын эшләү, ял итеү өсөн махсус ялан бүлеү - барыһы ла халыҡ өсөн эшләнгән.

Оҙаҡламай һыу инеү һәм урманға ял итергә йөрөү миҙгеле асыла. Ләкин Өфөлә берәй пляжға йәки ҡалаға яҡын урынға ял итергә барыуы ҡурҡыныс, сөнки унда һыу бысраҡ, сүп-сар өйөмө, ашамлыҡтар ҡалдығы. Минә ҡалһа, бөтә пляждарҙы ла шәхси ҡулдарға ҡуртымға биреп, түләүле итергә кәрәк. Ә уларҙан үҙ сиратында һыу буйын матур һәм таҙа тотоуҙы талап итеү мотлаҡ.

Өфөнөң ҡалҡыулыҡта ултырыуы уға туристик йәнәттән ҙур өҫтөнлөк бирә. Ҡаланың күп урынынан уны уратып аҡҡан йылғаға, бөтә тирә-йүнгә матур күренеш асыла. Яҫы, ялпаҡ урында урынлашҡан ҡалаларҙың бер матурлығын да күрмәйем.

Йәй һәм көҙ башында Өфөлә айырыуса матур. Ә иртә яҙ һәм ҡыш тураһында улай тип әйтмәҫ инем, сөнки яҙын ҡала бысраҡҡа, ә ҡышын күп урындарҙа ҡарға бата. Шулай ҙа быйылғы йылдың ҡышына был етешһеҙлекте бөтөрөү өҫтөндә әүҙем эшләгәндәрен күреп ҡыуандым. Яҙғы бысраҡ менән дә шундай уҡ темпта көрәшерҙәр, тигән ышаныстамын.

Күптән түгел бәйһеҙ һәм моронсаһыҙ алып йөрөү тыйылған эттәрҙең исемлеген тулыландырҙылар. Ә Өфөлә иһә күпселек эт хужалары был законды бөтөнләй һанламай. Ҙур һәм кеше өсөн хәүеф тыуҙырыусы эттәрен иркен итеп алып йөрөүҙәрен күп күрәм. Бәлә көн дә булмай. Эт, нисек генә ҡулға эйәләшкән булмаһын, хайуан һәм уның инстинкты ҡасан да булһа өҫкә ҡалҡа. Шуға күрә полиция хеҙмәткәрҙәре ошондай яуапһыҙ эт хужаларын күҙҙән ысҡындырмаһын ине.

**Сәлих АҪЫЛБАЕВ.**
**Бөрө районы.**

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Астма

❖ 0,5 л балға 6 лимондың һутын һығырға, 5 баш һарымһаҡты таҙартып, иҙергә һәм барыһын бергә быяла һауытта бутарға, 7 көнгә ҡараңғы урынға ҡуйырға. Көнөнә бер тапҡыр, 15-16 сәғәттәрҙә 4-әр балғалаҡ ашарға. Һәр ҡалаҡ араһында 10 минут интервал булырға тейеш. Бер ай буйына ҡабул итергә.

❖ 3 литр һөт әсегәндән һуң барлыҡҡа килгән һыуға 1 стакан бал, 100 грамм ваҡланған андыҙ тамыры өҫтәп, 4 сәғәткә эҫе мейескә ҡуйырға. Һыуытырға, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡлап эсергә. Дауаланыу курсы - 2-4 ай.

### Вена тамырҙары ауырыуҙары

❖ Яңы ғына йыйылған 100 грамм әрем үләнен һәм сәскәләрен иҙеп, 1 ҡалаҡ ҡатнашмаға ошо уҡ күләмдә әсе һөт өҫтәгеҙ. Ауыртҡан урындарға йоҡа ғына итеп һалып, бинт менән нығытырға. 4-5 көн дауалағандан һуң, 5 көн ял итергә лә, тағы ҡабатларға.

❖ "Антоновка" сортлы уртаса ҙурлыҡтағы 3 алманы һалҡын һыуҙа йыуырға һәм эмаль һауытҡа һалып, 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға. Яҡшы итеп баҫырып, йылы урында 3 сәғәт төнәтергә. Һыуынын алмаларҙы иҙергә һәм һөҙөлгән һыуҙы өҫтәргә. Иртән һәм кис 100 грамм ашарға.

❖ Аҡ сәскә майы веналарға йыйылып торған ҡанды тарата.

❖ 1 ҡалаҡ ҡомалаҡ тубырсығына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ҡайнап ултырған һыулы һауытта 15 минут торорға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр стакан эсергә. Вена тамырҙары ҡалҡып торған урындарға компресс эшләргә.

### Ҡалҡан биҙе

❖ 10 лимон һуты, 10 баш ваҡланған һарымһаҡ, 1 литр балды ҡушып, 7 көн төнәтергә. Көнөнә 1 тапҡыр 4-әр балғалаҡ эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *"Был конкурс минең кеүек малай-ҡыҙҙарға сәхнәнән ҡурҡмаҫҡа, матур һөйләшергә, ә әкиәттәр - насарлыҡтан һәйбәтте айырырға, насар булһа, сәхнәләге күренеште ҡабатламаҫҡа өйрәтә", - тип һөйләне 10 йәшлек Луиза.*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ БАЛАҪЫ

**Бер нисә генә төҫтән һәм сикләнгән орнаменттан буй балаҫтың әллә күпме вариантын һуғыу - ул ҙур сәнғәт. Республиканың көньяҡ-көнсығыш төбәгендә йәшәгән оҫтабикәләрҙең бер балаҫы ла икенсеһенә оҡшамаған. Был яҡтарҙа бер ауылда, мәҫәлән, бер төрлө балаҫ осрамай. Шул уҡ ваҡытта, был төбәктә Башҡортостандың башҡа районадарында, көнсығыш Урал аръяғындағы кеүек биҙәкле балаҫтар һуғылмаған. Уларҙың төп балаҫы - буй балаҫ.**

Йәйләүгә сығып йәшәү рәүеше һәм унда төп торлаҡ булып тирмә һаҡланған мәлдә көньяҡ башҡорттарында кейеҙҙе, шулай уҡ тирмә эсен биҙәү өсөн декоратив таҫмалар ҙа һуғылған. Киң итеп һуғылған буй баш ҡор тип аталған һәм торлаҡтың өҫкө өлөшөнә горизонталь рәүештә беркетелгән.

15-20 см киңлектәге буйҙар ҡаты итеп иләнгән һәм ике ҡатланған йөндән шул уҡ балаҫ һуғыу станогында ябай ғына техника ҡулланып һуғылған. Сите һәм уртаһында тигеҙ генә линиялар, "баҫҡыстар", "тештәр", пунктирҙар төп биҙәк булған. Тарыраҡтарын ике йәки дүрт таҡтанан торған ҡоролмала һуҡҡандар. Унда, ғәҙәттә, толом йәки шыршы биҙәге килеп сыҡҡан, һоро һәм аҡ йөн ҡулланылған, ҡайһы саҡта ҡыҙыл төҫтө лә ҡушҡандар.

Башҡортостан Республикаһының Милли музейы фондында тирмә өсөн тәғәйенләнгән үрелгән һәм һуғылған таҫмалар өлгөләре һаҡлана. Улар араһында интегралдар сылбырын тоташтырып сигелгән һәм ситтәренә өсмөйөштәр ҡуйылған кеүек ҡыҙыл биҙәкле аҡ йөн таҫма айырылып тора. Ул һуғыуҙың ике нигеҙле ысулы; биҙәк сыбыҡ йәки шәбе ярҙамында йыйыла, тап ошо ярҙамсы сыбыҡтар менән нигеҙҙең "биҙәкле" нигеҙен өҫкә күтәрәләр. Шул рәүешле ҡунаҡ тирмәһе - аҡ тирмәне биҙәгәндәр, таҫмаларҙан үҙенсәлекле бордюр килеп сыҡҡан. Әле беҙ телгә алған таҫма ҡаҙаҡтарҙың "оҙон бау"ына оҡшаған. Ултар ғына һуғыу станогында киңлеге 10-15 см итеп һуғылған ике төҫтәге таҫма. XIX-XX быуаттар сигендә ҡаҙаҡтарҙа, ҡырғыҙҙарҙа, ҡарағалпаҡтарҙа тирмәне биҙәү өсөн тап ошондай таҫмалар һуғылған. Башҡорттарҙа, был туғандаш халыҡтарҙыҡы кеүек, таҫмалар төрлөлөгө булмаһа ла, көнкүрештә декоратив таҫмалар киң ҡулланылған. Ҡаҙаҡтар һәм ҡырғыҙҙарҙа ла был тар таҫмаларҙы һуғыу ысулдары башҡорттарҙыҡына оҡшаш булған.

XX быуаттың уртаһына тиклем ярым күсмә малсылыҡ менән шөғөлләнгәнгә күрә, күп кенә халыҡтарҙың көнкүрешендә тар йөн таҫмалар төрлөсә ҡулланылған. Күсмәндәрҙең дөйөм тарихында буй балаҫтарҙан тегелгән арҡыры буйлы сыбар балаҫтар иң боронғо һәм үҙенсәлекле күренеш. Көньяҡ-көнсығыш башҡорттарында, һуғыу станогының бер ни тиклем камиллашыуына ҡарамаҫтан, ул балаҫ һуғыуҙың берҙән-бер ысулы булып ҡалған.

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*АФАРИН!*

**Балалар күңелендә тылсымға, мөғжизәгә, яҡшылыҡҡа ышаныс уятыусы башҡортса әкиәт һөйләүселәрҙең "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсы ошо көндәрҙә баш ҡалала оло байрам булып үтте. Өфө ҡалаһы хакимиәте тарафынан Башҡортостан Башлығының туған телдәрҙе һаҡлауға һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән грант аҡсаһына ойошторолған конкурс быйыл төбәк-ара кимәлгә күтәрелде һәм Башҡортостандан ғына түгел, ә күрше республика һәм өлкәләрҙән бик күп конкурсанттарҙы берләштерҙе.**

# ӘКИӘТ ҺӨЙЛӘП...

## туған тел мөғжизәһе тыуҙырҙылар









"Һаумы, һаумы, әкиәт!" төбәк-ара конкурсының йомғаҡлау тантанаһы быйыл кескәйҙәрҙе ҡыҙыҡлы ла, тынғыһыҙ ҙа сысҡандар иленә сәйәхәт иттерҙе. Күршеләш йәшәгән аҡ һәм һоро сысҡандар ғаиләһе татыу түгел, "Евромаус" конкурсына әҙерләнгәндә лә ирешеп-талашып китәләр. Атай-әсәйҙәрен мәңгелеккә дуҫлаштырыу өсөн Аҡыя менән Һороҡай Бөйөк тылсым батшаһы Бесәйҙән ярҙам һорарға мәжбүр. Дуҫлыҡ тылсымын оҙаҡ эҙләргә лә түгел, әлбиттә, ул нәҡ "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсында барлығын Бесәй белә һәм сысҡандар шунда юллана. Ошондай изге ниәт менән йөрөгән сысҡандарға балалар ҙа ихласлыҡ күрһәтмәй ҡалманы: конкурсҡа тип әҙерләгән әкиәттәрен тасуири итеп һөйләне, сәхнәләштереп тә күрһәтте. Һәр һөйләнгән әкиәттән һуң күктән һибелгән тылсымды йыйып мәж килгән сысҡандарҙы күҙәткән ололар ҙа, балалар ҙа ошо минуттарҙа ата-бабаларыбыҙҙан мираҫ булып ҡалған әкиәттәрҙе туған телдә һөйләүҙең оло мөғжизә тыуҙырыуына инанды. Конкурстың әкиәтте яттан һөйләү, әкиәтте фольклор коллективтары һәм ғаилә менән сәхнәләштереү, йәнһүрәттәр һәм анимацион фильмдар әҙерләү, күргәҙмәләр эшләү, әкиәт геройҙары костюмдарын күрһәтеү, әкиәттәр ижад итеү номинациялары буйынса иңиңдәр тип танылған балаларҙың сығышын күреү бәхете тейҙе беҙгә. Тәүгеләрҙән булып Өфө ҡалаһы 293-сө балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүсеһе Рәсүл Абдрахманов "Тылсымлы моң" әкиәтен һөйләп ишеттерҙе. Уның көр тауышы үҙ-ара тартҡылашҡан сысҡандарҙы һиҫкәндереп ебәрҙе, үҙ эше менән булған залдағы кескәйҙәрҙе үҙенә ҡаратты һәм бөтәһен дә әсир итте. Алты йәшлек Рәсүл конкурстың балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре араһында яңғыҙ башҡарыусы булараҡ абсолют еңеүсе тип табылды. Ә бына мәктәп уҡыусылары араһында М. Исҡужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейы 3-сө синыф уҡыусыһы Искәндәр Мөхәмәтйәнов Гран-при яуланы. "Был конкурста 6 йәшемдән алып ҡатнашам, шуға әкиәттәрҙе күп кенә беләм. Быйыл "Арыҫлан менән ҡуян" башҡорт халыҡ әкиәтен һөйләнем, уны хайуандарҙы бик яратҡан өсөн һайланым. Бүләккә самокат бирҙеләр!" - тип тәьҫораттары менән бүлеште әкиәтсе малай.

Беҙҙең балалар татыу эш һөҙөмтәле булыуын күптән белә. Шуға улар йыл да әкиәтте коллективтары менән сәхнәләштерә. Конкурстың төп еңеүсеһе тип табылған Өфө ҡалаһы 308-се башҡорт балалар баҡсаһының Рәмилә Әбдрәхимова етәкселегендәге фольклор коллективы "Ни өсөн Төлкө хәйләкәр булған?" тигән башҡорт халыҡ әкиәтен сәхнәләштергән. Балалар үҙҙәренә бирелгән ролде килештереп уйнауы, оригиналь кейемдәре менән айырылып торҙо. Мәктәп уҡыусылары араһында Фатима Мостафина исемендәге 20-се башҡорт гимназияһының Наилә Байымова етәкселегендә эшләгән фольклор коллективы "Һоросай менән Ҡарасай" башҡорт халыҡ әкиәтен сәхнәләштереп, Гран-при яуланы. Фольклор төркөмдәрендә уйнаған балалар менән аралашып йөрөгән арала, 51-се башҡорт балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүсеһе 5 йәшлек Сәлиә Йәнтүрина менән таныштыҡ. Ул "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсының 2015 йылғы еңеүсеһе булған апаһы Фаягөл кеүек булырға хыяллана, әлегә дуҫтары менән "Ете кәзә бәрәсе" тигән әкиәтте сәхнәләштереүҙә ҡатнашҡан. Бына шулай тиҫтерҙәрҙе берләштереүсе, быуындарҙы бәйләүсе лә был конкурс.

Конкурс балалар баҡсаһы һәм мәктәп хеҙмәткәрҙәренең генә эш емеше түгел, был сара һәр башҡорт ғаиләһендә булдырылған милли мөхиттең сағылышы. Шуға күрә, әкиәтте ғаилә менән сәхнәләштереү номинацияһында халҡыбыҙҙың киләсәген хәстәрләп, рухлы, тәртипле, туған телен һыу кеүек эскән балалар тәрбиәләгән Белорет районынан Түләбаевтар, Йосоповтар ғаиләһе, Баймаҡтан Хәсәновтар һәм Өфөнән Абдуллиндар ғаиләһе призлы урындар алды. Ә бына Бөрйән районы Ғәҙелгәрәй ауылында йәшәүсе Әлиә менән Әлфир Юлсуриндар ғаиләһе "Тирмәкәй" урыҫ халыҡ әкиәтен сәхнәләштереп, иң төп еңеүсе тип табылды. Юлсуриндар ғаиләһендә дүрт һылыу ҡыҙ үҫә: Луиза, Эльвина, Диана һәм Алина. "Бөгөн тышта төрлө уйындар уйнаныҡ, башҡаларҙың әкиәт һөйләүен дә тыңланыҡ, бүләктәр ҙә алдыҡ. Был конкурс минең кеүек малай-ҡыҙҙарға сәхнәнән ҡурҡмаҫҡа, матур һөйләшергә, ә әкиәттәр - насарлыҡтан һәйбәтте айырырға, насар булһа, сәхнәләге күренеште ҡабатламаҫҡа өйрәтә", - тип һөйләне 10 йәшлек Луиза.

Конкурста шулай уҡ "Йәнһүрәттәр һәм анимацион фильмдар" номинацияһында беренсе урынды Баймаҡ ҡалаһының "Күбәләк" балалар баҡсаһынан Рәмзил Хәсәнов яуланы. Донъя халыҡтары әкиәттәре күргәҙмәһе, башҡорт халыҡ әкиәттәре геройҙары номинацияһында Әбйәлил районынан Альбина Фәхрисламова һәм Өфө ҡалаһы 308-се башҡорт балалар баҡсаһының педагогик коллективы иң юғары баһаға лайыҡ булды. Ойоштороусылар быйыл тәүге тапҡыр "Йәш әкиәтсе" тигән номинация булдырҙы һәм балалар үҙҙәре ижад иткән әкиәттәрҙе тикшереп, беренсе урынды "Ҡуян ниңә ҡурҡаҡ?" тигән әкиәте өсөн Бишбүләк 1-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе уҡыусыһы Булат Ғатауллин менән "Һыу һаҡсыһы ҡондоҙ" әкиәте өсөн Өфө ҡалаһы 114-се айырым фәндәрҙе тәрәнәйтеп өйрәнеүсе белем биреү үҙәге уҡыусыһы Азалия Сәмиғуллинаға бирҙе. Бөтә йәш ҡәләм тирбәтеүселәрҙең ижад емештәре "Борон-борон заманда" тип аталған йыйынтыҡҡа индереләсәк, тинеләр. "Үҙҙәре әкиәт яҙған балалар күп, улар хатта үҙҙәренең хыялдарын әкиәт эсенә яҙа. Мәҫәлән, кем менән дуҫлашырға теләүе, йәки кемделер өйрәтергә, хатта кәрәген биреп әҙерәк аҡылға ултыртырға, берәү алдында үҙенең аҡыллы, көслө булыуын иҫбат итергә теләүе, кемделер яратыуы тураһында яҙғандар. Балалар ижад иткән әкиәттәрҙә күбеһенсә үҙ-ара мөнәсәбәт, тормошҡа үҙ ҡарашын раҫлау темалары ята, - ти конкурстың жюри ағзаһы, журналист Сәрүәр Сурина. - Конкурсты башлап ебәргән Әлмира Ҡыуатова һәм уның ҡыҙы Алтынай Буринаның ойоштороу мәшәҡәттәре менән нисек янып-көйөп йөрөүҙәре хәтерҙә. Уларҙың башланғысы бөгөн ошондай ҙур байрамға әүерелеүен күреүе ҡыуаныслы, балаларҙың туған телебеҙҙә матур һөйләшеүе, халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадын белеүе күңелдәрҙе йыуата. Был улар өсөн иң ҙур тормош һабаҡтары биргән байрам, уға киләсәктә киң ҡолас менән эшләп китергә яҙһын".

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

✓ Юрматы ырыуы көньяҡ-көнсығыш башҡорттары төркөмөнә ҡарай. Уларҙың бөгөнгө вариҫтары башлыса Башҡортостандың Ишембай һәм Ғафури, Мәләүез, Стәрлебаш, Стәрлетамаҡ, Федоровка райондарында йәшәй.



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЮРМАТЫЛАР БЕҘ!




**XIX быуатта йәшәгән билдәле башҡорт мәғрифәтсеһе, ғалим һәм яҙыусы Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев һәр аҫаба башҡорт өсөн үҙенең сығышын - ҡайһы ырыуҙан булыуын иҫтә тотоуҙы, йондоҙҙарҙы исемләп аңлата алыуҙы, хандар тарихына ҡараған риүәйәттәрҙе һәм өләндәрҙе белеүҙе мотлаҡ, тип иҫәпләгән. Ысынлап та, һәр кемебеҙҙең шәхси шәжәрәһе, күк көмбәҙендә балҡыған йондоҙҙар бер бөтөн йыһанды хасил иткән кеүек, һәр беребеҙҙе быуаттар төпкөлөндә көн иткән ырыуҙаштарыбыҙҙың меңйәшәр тормош ағасы менән тоташтырып, башҡорт халҡының ғәжәп бай тарихи мираҫынан бар булған рухи йыһаныбыҙ асылын аңлау мөмкинлеген бирә. Бик тә ышанып әйтәм, ырыуҙарыбыҙ тарихын өйрәнеү өлкәһендә беҙҙе киләсәктә аҫыл асыштар көтә. Ошоларҙы иҫәпкә алып, милләттәштәребеҙ иғтибарына башҡорт ырыуҙары тарихын сағылдырған мәғлүмәттәр тәҡдим итәбеҙ.**

Юрматы ырыуы 4 тиҫтәнән ашыу башҡорт ырыуҙары араһында халҡыбыҙҙың иң ҙур этник берләшмәләренең береһе булып тора. Күренекле тарихсы, этнограф Р.Ғ. Кузеев классификацияһына ярашлы, юрматы ырыуы көньяҡ-көнсығыш башҡорттары төркөмөнә ҡарай. Уларҙың бөгөнгө вариҫтары башлыса Башҡортостандың Ишембай һәм Ғафури, Мәләүез, Стәрлебаш, Стәрлетамаҡ, Федоровка райондарында йәшәй. Татарстанда, Ырымбур һәм Саратов өлкәләрендә лә сығышы менән юрматыларға ҡараған башҡорттар бар.

Тарихсылар юрматы башҡорттарының килеп сығышы хаҡында төрлөсә фекер йөрөтә, бәхәсле фараздар ғилми әҙәбиәттә "башҡорт-венгр ҡәрҙәшлеге" тип аталған проблема менән бәйле. Билдәле булыуынса, XIII быуат урталарында монгол ханлығына сәйәхәт ҡылған Рим папаһы илсеһе Иоан де Плано Карпини һәм Франция короле Людовик IX илсеһе Вилгельм де Рубрук үҙ яҙмаларында башҡорт менән венгрҙарҙы бер үк халыҡ, улар бер телдә һөйләшә, тигән мәғлүмәт ҡалдыра. Уларҙың икеһе лә башҡорт ерендә булмай, башҡа бер сығанаҡтарҙан алынған мәғлүмәтте теркәй. Быға тиклем XII быуатта уҡ ғәрәп сәйәхәтсеһе Әбү Хәмит әл Ғарнати ҙа Венгрияла булып, унда йәшәгән халыҡты башҡорт атамаһы менән нарыҡлай. Артабан тап ошо ерлектә венгр-һунгарҙар менән башҡорт этногенезындағы уртаҡлыҡ идеяһы тарала башлай. Әйткәндәй, ошо буталсыҡты файҙаланып, Татарстандың ҡайһы бер ғалимдары боронғо тарихта тик венгрҙар ғына башҡорт атамаһын йөрөткән һәм, йәнәһе, уларҙың Көньяҡ Уралда ҡалғандары тик Алтын Урҙа тарҡалғандан һуң ғына хәҙерге башҡорт этносына нигеҙ булған, имеш, тип баш вата.

Шул уҡ ваҡытта XIII быуатта йәшәгән ғәрәп авторы Ибн Сәйет әл Мәғриби башҡорт һәм һунгар (венгр) халыҡтарын айырып ҡарай: "...Әл Һункар иле. Улар - төркиҙәр, башкурдтарҙың туғандары... Татарҙар килеп еткәс, унда уларға ҡаршы һункарҙар, башкурдтар, алмандар йыйналды. Һәм улар (татарҙар) еңелде...", - тип яҙа ул. Венгрҙар - христиан (католик) динен тота, башҡорттар - мосолмандар. Тап шул айырманы шул уҡ XIII быуатта ғәрәп энциклопедисы Яҡут әр Руми билдәләй: франктарҙың "әл Нункар" тигән халҡы илендә "әл башгурдийа" ҡәбиләһе мосолмандары йәшәүе хаҡында әйтеп китә ул. Ул Алеппо ҡалаһында "әл башгурдийа" халҡынан булған мосолман хоҡуғын өйрәнеүсе талиптар менән дә осраша.

Боронғо башҡорттарҙың венгрҙар төйәк иткән Дунай буйындағы Паннония еренә барып юлығыуының үҙ тарихы бар. Башҡорттарҙың бер өлөшө, IX быуат аҙағында бәшнәктәр менән союзға инеп, уғыҙ, ҡарлуҡ һәм кимаҡтар ҡыҫымына ҡаршы һуғыша, әммә еңелеүгә дусар булып, Ҡара диңгеҙ буйҙарына барып сыға. 932 йылда, ғәрәп тарихсыһы әл Масуди яҙғанса, бәшнәк, яджни, баджгурд, нәүкерд ғәскәре, Византия ҡалаларына һөжүм итеп, уларҙы баҫып ала. 1091 йылда Византия императоры Константинополде ҡамаған бәшнәк-башҡорттарға ҡаршы ҡыпсаҡ хандары Бүнәк менән Туғарҡандың 40 меңлек ғәскәрен йәлеп итеп, уларҙы еңеүгә өлгәшә. Шунан һуң ғына ҡалған бәшнәктәр һәм башҡорттар Венгрия иленә килеп, уның короле ғәскәрҙәренә хәрби хеҙмәткә алына.

XI быуатта йәшәгән тел белгесе Мәхмүт әл Ҡашғари ҙа "Диван лугат ат-Турк" китабында билдәле төрки ҡәүемдәре иҫәбенә башҡорттарҙы ла индерә. Ул ҡырғыҙ, ҡыпсаҡ, уғыҙ, тухси, яғма, чигиль, иғраҡ, джаруҡ ҡәбиләләре һөйләшкән телде саф һәм берҙән-бер төрки тел, тип атай ҙа, ямаҡ һәм башҡорт телдәрен шул телгә яҡын, тип яҙа.

Шул уҡ ваҡытта боронғо башҡорт һәм венгр халыҡтары араһында ҡасандыр тығыҙ бәйләнеш булып, улар араһында билдәле бер тарихи ҡатнашлыҡ булыуын бөтөнләйгә инҡар итеп булмай. Юрматы ырыуы тарихы ла ошоға бер дәлилдер. Ошо йәһәттән ғалимдар башҡорттарҙың юрматы һәм йәнәй ырыуҙары атамаларының параллеле рәүешендә венгрҙарҙың дьярмат һәм енё этнонимдарын килтерә. Хәҙерге венгр телендә төрки телдәре менән уртаҡ тамырлы һүҙҙәр осрай, әммә улар күп түгел; был ысынлап та ҡасандыр венгрҙарҙың төрки ҡәүемдәре менән йәнәшә йәшәп, билдәле бер бәйләнештәре булыуына дәлил. Ҡайһы бер ғалимдар "юрматы" этнонимын уғыр халыҡтары теленән ингән, тип иҫәпләй. Ошонан сығып, юрматыларҙың ата-бабалары төркиләшкән уғырҙарҙан булыуы мөмкин, тигән фараз да бар. Билдәле венгр академигы Д. Немет, киреһенсә, юрматы исеме сыуаш теленә яҡын төрки тамырлы атама, тип яҙа.

Р.Ғ. Кузеев юрматыларҙың боронғо төрки тамырҙарын уларҙың шәжәрәләрендәге мәғлүмәт аша күҙаллап булыуына ишаралай. "Һаҡланып ҡалған юрматы шәжәрәләренең барыһында ла ырыуҙың генеалогияһы һәм боронғо тарихы тик төрки донъяһы менән бәйләнә", - тип яҙа ғалим. Шәжәрәләрҙең береһе Библияла атап үтелгән төркиҙәрҙең төп бабаһы Яфес һәм уның улы Төрктән башланып, артабан Тутек, Иджә, Баҡты, Кийек, Илтәзәр, Илбарыҫ, Юлбарыҫ, Аҡъегет, Сулун, Дербеш, Хамат, Амат, Юрматы исемдәренән хасил була. Икенсе бер шәжәрәлә Юрматы бей Бөрйәндең бер туған ағаһы итеп күрһәтелгән.

Р.Ғ. Кузеев юрматыларҙың сығышы боронғо булғарҙар менән бәйле булыу мөмкинлеге тураһында ла фараз итә. Унынса, юрматы шәжәрәләрендәге Илбарыҫ, Юлбарыҫ, Дербеш исемдәренә параллель Барас, Барс, Дарваш тигән булғар исемдәрен атарға була. Этнограф юрматыларҙың икенсе бер башҡорт ырыуы - юрмыйҙар менән туғандаш булыуы ихтималлығын да билдәләй. Ә Волга булғарҙарының Дунай болгарҙары менән нәҫелдәшлеген иҫәпкә алғанда, һуңғыларының боронғо ырыуҙарының береһе ерми ырыуы тип аталыуы ҡыҙыҡлы. Был атама боронғо болгар сығанаҡтарында осрай, Плиски ҡалаһы янында табылған, IX быуатҡа ҡараған колонналағы яҙыуҙа ермиарис һүҙе бар. Шулай уҡ сыуаштарҙа мәжүсилек осорона ҡараған Юрмет, Юрмекей исемдәре барлығы билдәле. Р.Ғ. Кузеев таулы башҡорттарҙың заманында юрматыларҙы сирмеш башҡорттары, тип атауын да ошо боронғо юрматы-булғар бәйләнеше һөҙөмтәһе итеп күрә.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ



*Әхмәтзәки ВӘЛИДИ ТУҒАН*

## БАШҠОРТ

Тәүге ҙур бола 1661 йылда көнбайыш Башҡортостанда Сәйет батыр (йәки Сәйет Йәғәфәр) етәкселегендә башланған. Бер-ике йыл ара менән дауам иткән был баш күтәреү ваҡытында башҡорттар Венгрия эсендәге Дебреценға ҡәҙәр барып еткән (ҡарағыҙ: Зәки Вәлиди Туған. Шул уҡ әҫәр, 102-се бит). Был хәрәкәттәр ваҡытында Дағстан һәм Ҡырымға килгән Әүлиә Чәләби башҡорттарҙы нуғайҙар атаған кеүек һәштәк, йәғни иштәк тип атап үтә. Әйтергә кәрәк, башҡорттар Урыҫ мырҙаның батша Иван IV яҙған хатында ла, Әбүлғәзи Баһадир хандың әҫәрендә лә иштәк йәки истәк тип телгә алына. Әүлиә Чәләби башҡорттарҙы рустар менән һуғышҡан заманда күреүен һәм хатта ике шаһзадәләре Шәйбанлы Күсем хандың улдарынан әйтеп үтелгән Ишем Солтандың улы Абуға һәм ейәне Кесе Солтаны менән осрашыуын теркәгән (1665-1676). Бынан тыш, Әүлиә Чәләби башҡорттарҙың ҡайһы берҙәре ғосманлы идараһы аҫтына инеп, ғосманлы дәүләтенең рус сиктәрендә рус һәм ҡалмыҡ һөжүмдәренә ҡаршы ярҙам тәҡдим итеүҙәрен өҫтәгән. Әүлиәнең яҙыуы буйынса, һәштәктәр, йәғни башҡорттар, "бик фанатик мөьмин һәм мосолмандар", үҙҙәре бик батыр булған һәм уларҙың үткер ҡылыстары бар (Тулы мәғлүмәт өсөн ҡарағыҙ: Әүлиә Чәләби, Сәйәхәтнамә, VII, 761, 811-825, 835-836).

1672 йылда башҡорттар ҡабаттан рустарҙың Өфө һәм башҡа ҡалаларына һөжүм итеп, рус крәҫтиәндәрен сапҡылағас, Рәсәй хөкүмәте 1675 йылда рустарға буйһонған башҡорт губерналарында тимерселекте үлем язаһы менән тыя. Сөнки башҡорттар бөтөн ҡоралдарын үҙҙәре эшләй ине. Бер һүҙ менән әйткәндә, башҡорттар һәр ваҡыт Рәсәйҙең эске һәм тышҡы ауырлыҡтарын файҙаланып баш күтәргән. Боласылар араһынан атап үтелгән Күсем хандың нәҫеленән рустар тарафынан "мөҡәддәс солтан" тип аталған Аҡай солтан һәм Ғәйеп солтан исемле ике юлбашсы - иң мәшһүрҙәре. 1710 йылда иштәктәрҙең (йәғни башҡорттарҙың) Истанбулға Бәһлеүән Ҡол исемле илсе ебәреп, ғосманлыларҙан ярҙам һорауы һәм солтандары (юғарыла телгә алынған Кесе Солтандың улы Ғәйеп солтан) рустар тарафынан үлтерелеүе өсөн Терек ҡалаһында 40000 русты сапҡылауын ғосманлы сығанаҡтары һөйләй (ҡарағыҙ: Рәшит Тарихы, III, 327-се бит). Был һуңғы хәрәкәт ныҡ көсәйгән һәм башҡорттар Ҡаҙан татарҙарының крәҫтиәндәре ярҙамы менән Ҡаҙан тирәләренә ҡәҙәр барып еткән. 17 йыл хөкөм һөргән был хәрәкәтте батша Петр I баҫтырған. Ниһайәт, 1728 йылда Мәскәүҙә башҡорт бейҙәренән Йәнсура менән фекер алышыу һуңында йомшаҡ шартлы килешеү төҙөлгән. Тыныслыҡты тәьмин итеү өсөн Өфө ҡалаһы губерна үҙәге итеп тәғәйенләнгән. Әммә көнсығыш башҡорттары, үҙҙәрен ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ хандарының идараһы аҫтында һанап, азатлыҡ өсөн көрәште дауам итте. Рустар иһә, ҡаҙаҡ хандарын ҡулда тотор өсөн һәм Ҡаҙағстан менән Башҡортостанды айырыр өсөн Яйыҡ йылғаһы буйында нығытмалар төҙөй. Башҡорттар ҡарағалпаҡ ханы Баһадирҙың улы Ғәйеп ханды хан итеп танып баш күтәрә (1735 йыл). Рустар был боланы баҫтырыр өсөн үлтереү, ҡаҙыҡҡа ултыртыу, кешеләрҙе мәсеткә тултырып яндырыу кеүек язалау сараларына мөрәжәғәт иткән.

**(Дауамы бар).**

# АУЫЛ еңел булмаған

**Бөгөн ауыл ерлегендә эшҡыуар булып китеү ауыр мәсьәләме? Нисек итеп был юлда хаталанмаҫҡа, ҡайһылайыраҡ итеп дөрөҫ йүнәлеш таба белергә? Эшҡыуарҙы ниндәй ауырлыҡтар көтә һәм уларҙы нисегерәк итеп хәл итергә мөмкин? Быларҙы үҙ башынан үткәргән кеше генә һөйләй ала, әлбиттә. Редакциябыҙ ҡунаҡтары яуаплылығы сикләнгән "Бай" ауыл хужалығы тәьминәт-һатыу-ҡулланыу кооперативы етәксеһе Рөстәм Иғдислам улы ӘХМӘТОВ менән теоретик белгес ролендә Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең баш ғилми хеҙмәткәре, иҡтисад фәндәре кандидаты, доцент Вилүр Йәмил улы ӘХМӘТОВ үрҙә телгә алынған мәсьәләләргә асыҡлыҡ индерер, тип уйлайбыҙ.**

**Әйҙәгеҙ, ошо һорауҙан башлайыҡ: бөгөнгө ауыл халҡының йәшәйешен нисек баһалайһығыҙ? Ауыр йәшәйме халыҡ? Әллә беҙ был мәсьәләне артыҡ ҡабартып ебәрәбеҙме?**

**Р. Әхмәтов:** Ауыл халҡы уртаса йәшәй. Насар тип тә әйтеп булмай, сөнки хәҙер һәр өйҙә тигәндәй транспорт. Һыйыр малынан тыш, йылҡы тоталар, ҡайһыларҙа улар иллешәр башҡа барып етә. Малды ла файҙаланып өйрәнде ауылда йәшәүселәр: ҡымыҙ, һөт аҙыҡтары етештереп һаталар, ит менән сауҙа итәләр. Шулай уҡ көҙ миҙгелендә тотоноуға ғына мал аҫырағандар ҙа бар. Бөгөн шул мал менән балаларын да уҡыта, кейендерә, ғаиләһен дә ҡарай ауыл кешеһе. Ә инде мал тотмағандарға көн итеү еңелдән түгелдер, һатып алып ҡына туҡланып йәшәү мөмкин дә түгел бит хәҙер.

**В. Әхмәтов:** Һәр районды, ауылды төбәгенә ҡарап баһаларға кәрәк йәшәү кимәлен. Мәҫәлән, бына минең тыуған ауылым булған Урғаҙаны телгә алғанда, унда йәшәүселәрҙең хәле шәптән түгел, тип әйтергә була. Элекке заманда даны яңғырап торған "Йылайыр" совхозы бөгөн бөлгөнлөккә төшкән ауылдарҙың береһелер. Мал менән булышҡан кешеләр, әлбиттә, бирешмәй, әммә улар бик аҙ. Ауылда һыу проблемаһы һаманға тиклем хәл ителмәй. Ир-егеттәр күпләп Себергә йәки башҡа яҡҡа эшкә сығып китеп бөткән һәм төбәк ҡатын-ҡыҙ менән ҡарт-ҡоро ҡарамағына тороп ҡалған, тиергә лә була...

**Ни өсөн беҙҙең халыҡта сәмләнеп донъя көтөүгә ынтылыш юҡ? Малдарын ишәйтергә, ерҙәрен киңәйтергә, мөлкәтен арттырырға тигән теләк юҡмы икән ни? Ни өсөн беҙ бай булыуҙан, байыуҙан ҡурҡабыҙ? Ә бит борон беҙҙең халыҡ мал артынан эйәреп, әллә ҡайҙарға ла сығып киткән, мал өсөн барымталашҡан һәм башҡалар...**

**В. Әхмәтов:** Башҡорттар араһында, ғөмүмән, мосолман халыҡтары араһында революцияға тиклем эшҡыуарлыҡ яҡшы үҫешкән булған. Хатта "эшҡыуарлыҡ" тигән төшөнсәгә тиклем үк байҙарҙың өйөр-өйөр малы, осһоҙ-ҡырыйһыҙ ерҙәре, ашлығы, урманы булған. Беҙҙең яҡта заманында сит илдән автомобиль, бесән сабыу машиналары алдырған хәлләләр ҙә йәшәгән. Уртаса көн итеүселәрҙең дә икешәр һыйыры, бер нисә баш йылҡы малы иҫәпләнгән. Һәр хәлдә, һәр ғаилә үҙ ерендә иген игеп, бесән сабып, нимәләре менәндер сауҙа итеп йәшәй алған. Артабанғы колхозлашыу, коллективлашыу һәм совет осоро үҙ сәйәсәте менән беҙҙең халыҡ аңындағы "үҙ аллылыҡ" тигән төшөнсәне бөтөнләй юйып ташланы. Байҙарҙы ғәйепләне, уларҙан енәйәтселәр яһап, һөргөнгә һөрҙө, репрессия йылдарында байҙарҙың затырыуын эҙәрлекләп ҡоротто. Ошо хәтлем трагедиялар, әлбиттә, эҙһеҙ үтмәне - беҙ бай булыуҙан биҙерәп, ҡурҡып ҡалдыҡ. Бәхеткә күрә, бына хәҙер ул замандарҙан һуң бер нисә быуын алышынды инде һәм беҙгә яйлап-яйлап үҙ асылыбыҙ ҡайта килә. Күрәһегеҙ бит, эшҡыуарҙар күбәйә бара. Халыҡ кемдәндер, ҡайҙандыр көтөп ултырыуҙың файҙаһыҙ икәнен төшөнөп етте, ниһайәт. Өлкәнерәктәр үҙҙәрен һындырып, баҙар иҡтисадына яраҡлаша алмаһалар ҙа, уларҙың балалары, ейәндәре ҡулайлаша ала.



**Р. Әхмәтов:** Ауыл ерендә бай булып йәшәүҙең шарттарын ҡарап китәйек әле иң тәүҙә. Хатта боронғо байҙарҙы ғына алып ҡарағанда ла, улар бит бер тоҡ алтын табып байып китмәгән. Улар быуыны-быуыны менән шул мөлкәтте арттырыу өсөн тир түккән. Кемдәрҙелер яллап эшләтерлек булғансыға тиклем, улар бар нәмәне лә үҙ ҡулдары менән тотоп эшләгән, балаларын йәштән шул хеҙмәткә еккән. Һәм бөгөн дә ауылда бай булыу өсөн ҡара таңдан төн уртаһына тиклем эшләргә кәрәк. Бер көн тырыштым да, икенсе көн ял иттем түгел. Бер көн айыҡ булдым да, икенсе көн байрам итеп йөрөнөм түгел. Көн дә, көн дә - алһыҙ-ялһыҙ эшләү кәрәк! Байлыҡ ул ялҡауҙар, ҡурҡаҡтар, баҙнатһыҙҙар өлөшө түгел.

Ауылдарҙа хәлләнеп барған ғаиләләргә әле лә ҡырын ҡараш бар. "Байға ялланып эшләгәнсе" тип ғәрләнгән була ла беҙҙекеләр, әллә ҡайҙағы Себер байына барып яллана. Унда ғаиләһенән айырылып, өшөп-туңып, һаулығын бөтөрөп йөрөп ҡайта. Беҙҙә бына ҡатын-ҡыҙҙар бик ихлас эшләйҙәр, һөт аҙыҡтарын уларҙан яҡшы белгән кем бар инде? Ә бына мал көтөргә ир-егет табып булмай. Йә эсәләр, йә яуапһыҙ ҡарайҙар - бына шундай хәлдәр. Мал ҡараусыны шунлыҡтан ситтән алып килергә мәжбүр булабыҙ.

**Эшһеҙ ҡалыу, эшһеҙлек, эшләргә теләмәү кешене әҙәм булараҡ юҡҡа сығарыусы иң беренсе фактор, тигәнгә ниндәй фекер әйтерһегеҙ?**

**В. Әхмәтов:** Бөгөн беҙ эшләү һәм эшһеҙ ҡалыуҙы шул тиклем хөкүмәткә бәйле итеп кенә ҡабул итәбеҙ. Йәғни, тик хөкүмәткә, дәүләткә генә эшләп була, тигәнде башыбыҙға һеңдергәнбеҙ. Ә эшләү ул, ғөмүмән, тәнде физик рәүештә йәки башты аңлы рәүештә хәрәкәттә тотоу, шул хеҙмәт арҡылы ҡәнәғәтлек, файҙа алыу, шул рәүешле үҫеү ул. Кеше ошолай эшләү рәүешенән яҙа икән, уның тәнендә лә, аңында ла кире реакция китә. Ҡыҫҡаса әйткәндә, деградация башлана.

Ауыл ерендә, мәҫәлән, хужалыҡта мал тотоу ғына ла үҙе үк ҙур хеҙмәт талап итә. Хужа иртәнән-кискәсә шул малды тәрбиәләү, ашатыу маҡсатында әллә күпме эш-хәрәкәт башҡара. Шул хеҙмәте барышында ул төрлө эмоциональ торошҡа инә, әллә күпме уйҙар уйлай, ыңғай тойғолар кисерә. Йәки баҡса сәсеү ҙә һине яҙ-йәй-көҙ буйына ҡыбырлата. Йәки уҡыу ҙа - хеҙмәт, спорт менән шөғөлләнеү ҙә хеҙмәттең бер төрө булып тора. Кешене үҫешкә алып бара икән - был хеҙмәт.

**Ауыл халҡы һеҙгә "Эшҡыуарлыҡты нимәнән башларға?" тигән һорау менән йыш мөрәжәғәт итәме? Һәм бына ошо эште башлаған ваҡытта күпселек тарафынан яһала торған иң беренсе хаталар ниндәй ул?**

**Р. Әхмәтов:** Йыш киләләр, шылтыраталар шул һорау менән. Әлбиттә, һәр кемгә хәлдән килгән тиклем ярҙам итәбеҙ, берәүҙе лә бороп ебәргәнебеҙ йәки яуап бирмәй ҡалдырғаныбыҙ юҡ. Башта нисек була: тәүҙә ул бик дәртле башлана, теләктәр хәтәр, пландар айҡап сыҡҡыһыҙ була. Әммә беҙҙең халыҡ күп осраҡта шул уйҙан үтеп, эште хәрәкәттә башҡара алмай аҙаплана. "Тәүәкәллек" тигән нәмә етмәй. Ҡыйыулыҡ етмәй! Һәм, ахырҙа, шул беҙҙең менән кәңәшләшкәндәрҙең егерменән береүһе генә ысынлап эшкә тотонһа ла, "ярай әле" тибеҙ.

Беҙҙә эшҡыуарлыҡты үҫтереү өсөн бөтөн шарттар ҙа тыуыҙырыла йәки эшҡыуарҙарға ярҙамға, тигәнерәк темаларға күп һөйләнә, яҙыла һәм нимәләрҙер тормошҡа ашырыла ла кеүек. Ә реаль ысынбарлыҡта был мөмкинлектәрҙе ҡуллана алмау өсөн бөтөн ҡаршылыҡтары ла булдырыла һымаҡ. Бына шундай көлкө лә, ҡыҙғаныс та хәл.

Эш башлаусыларҙың иң беренсе хатаһы - ҡапыл ғына килем алырға теләү. Ҡапыл ғына килем булмай ул. Башта бик күп эшләргә, ныҡ сабырлыҡ һәм ныҡышмалылыҡ һалырға кәрәк. Ныҡлыҡ кәрәк. Ауырлыҡтарға ла, ҡаршылыҡтарға ла, күңел төшөнкөлөгөнә лә бирешмәҫкә, мөмкин тиклем ҡурҡмаҫҡа, шөбһәләнмәҫкә. Тағы ла - үҙеңде йәлләмәҫкә. Был хаҡта мин кәңәш һорап килгән егеттәргә лә әйтәм. Бына минең инде биш йыл бер ергә лә йөрөй алғаным юҡ. Сөнки әле бына бишенсе йыл тырыша торғас, яңы саҡ минустан сыҡтыҡ. Был ваҡыт эсендә барыһына ла ҡул һелтәп ҡуйғы килгән саҡтар ҙа булды. Шундай мәлдәрҙә йыйынабыҙ ҙа, йә концертҡа, йә берәй мәҙәни сараға, ҡунаҡҡа барып, онотолоп, яҙылып ҡайтыу ярап ҡала.

**Ауыл эшҡыуарының иң бәкәленә һуҡҡан нәмәләр нимәләр улар?**

**Р. Әхмәтов:** Иң ҙур сығымдарҙы талап иткәне - яғыулыҡ һәм электр энергияһы. Ябай кеше ике һум етмеш тин менән түләгән электр энергияһын эшҡыуар биш һум алтмыш тин менән түләй. Ни өсөн бында шулай айырма ҙурҙыр - аңлауы ҡыйын. Ошо тәңгәлдә генә лә эш башлаусы эшҡыуарҙар минустан сыға алмай ыҙалай. Беҙҙең илдә дәүләт электростанцияһы юҡ, барыһы ла шәхси ҡулдарҙа, шунлыҡтан, даими хаҡтар ҙа ҡуйылмаған, кем нисек теләй, шулай хаҡ ҡуйып тик ултыра.

Кооператор булараҡ, мин яғыулыҡтың да, электр утының да хаҡын осһоҙораҡ итеү юлдарын уйлайым. Мәҫәлән, әҙер продукцияны ҡалаға оҙатыу өсөн кооператорҙар йыйылып, бер машинаны яллап ебәрә ала һәм башҡалар. Унан энергияны ла производствола тотона торған ҡояш батареялары аша алырға мөмкин. Һәр бер эшҡыуарҙың автоном электр станцияһы булырға тейеш, шунһыҙ ауыл хужалығы өлкәһендә күтәрелеү бик ауыр. Әлеге мәл тап шул мәсьәләне юлға һалыу буйынса министрлыҡ тупһаһын тапайым.

***Кооператив ысулында ауыл халҡы бер юридик шәхестең ҡул аҫтында төрлө йүнәлештәге эшҡыуарлыҡ менән булыша ала. Был эште бер йәки ике кешегә башлауы ауыр, ә бер нисә кеше берләшеп тотонһа, күпкә еңелерәк тә, тиҙерәк тә була. Беҙҙең "Бай" кооперативында, мәҫәлән, ун дүрт хужалыҡ иҫәпләнә. Һәр кем үҙ йүнәлешендә тауар етештерә һәм һатыуға сығара. Бында, беренсенән, һәр кемдең юридик документтар менән ваҡыт һәм көс түгеп йөрөү мәсьәләһе төшөп ҡала, икенсенән, һатыуға тауарҙар бер үк машина менән юллана ала. Өсөнсөнән, хакимиәт етәкселектәре менән аралашыу ҙа ойошҡан рәүештә бара, шулай уҡ бергәлек тойғоһо ла ҙур көскә эйә.***

**Кооператив ысулының уңайлыҡтары хаҡында һөйләп китегеҙ әле? Ауыл эшҡыуарҙарына ни өсөн был юл уңайлыраҡ?**

**Р. Әхмәтов:** Кооператив ысулында ауыл халҡы бер юридик шәхестең ҡул аҫтында төрлө йүнәлештәге эшҡыуарлыҡ менән булыша ала. Был эште бер йәки ике кешегә башлауы ауыр, ә бер нисә кеше берләшеп тотонһа, күпкә еңелерәк тә, тиҙерәк тә була. Беҙҙең "Бай" кооперативында, мәҫәлән, ун дүрт хужалыҡ иҫәпләнә. Һәр кем үҙ йүнәлешендә тауар етештерә һәм һатыуға сығара. Бында, беренсенән, һәр кемдең юридик документтар менән ваҡыт һәм көс түгеп йөрөү мәсьәләһе төшөп ҡала, икенсенән, һатыуға тауарҙар бер үк машина менән юллана ала. Өсөнсөнән, хакимиәт етәкселектәре менән аралашыу ҙа ойошҡан рәүештә бара, шулай уҡ бергәлек тойғоһо ла ҙур көскә эйә.

**Тормошта ҙур бизнесмендарҙың уңышҡа килеп еткәнсе был юлды әллә нисә төрлө итеп башлап ҡарауын һәм тәүгеләрендә йыш ҡына тулыһынса ҡыйралышҡа дусар булыуын да беләбеҙ. Ауыл эшҡыуарҙарына, ҡаршылыҡтарға осрағанда, был турала һәм башҡа нескәлектәр хаҡында белеү ҙә файҙаға булыр ине, шулай бит?**

**В. Әхмәтов:** Минең дуҫтарым араһында ла икешәр-өсәр

✓ ***Ауыл хакимиәтенә лә эшҡыуарҙар бер ярҙам ғына бит, әгәр үҙҙәре дөрөҫ мөнәсәбәт тота белһә. Нимәлер үткәрә икән - ярҙам, нимәлер ойоштора икән - бағыусы, тигән кеүек. Аҡыллы етәксе быларҙы үҙе лә белергә тейеш.***



тапҡыр үҙ эшен башлап ҡараусылар бар. Тәүгеләрендә "башҡаса тотонмайбыҙ" тип ябылдылар ҙа, рухи көс, белем туплап алып, яңынан башланылар. Был юлда уларға хәләл ефеттәре лә, туғандар ла ҙур ярҙам булып тора. Бына, Рөстәм Әхмәтов менән Гөлдәр Ишҡыуатованың миҫалында ла беҙ ғаиләнең бер маҡсат менән эшләү өлгөһөн күрәбеҙ. Уңышҡа өлгәшеү өсөн был мөһим. Яҡын кешеңдән хуплау ишетеү, уның терәген, ярҙамын тойоу ҙа көс бирә ул кешегә. Шул уҡ ваҡытта бизнесҡа, эшкә артыҡ бирелеп йәки уңыштарҙан артыҡ шашып китеү ҙә матур күренеш түгел. Таныштар араһында туҡһанынсы йылдарҙа ярайһы уҡ

Беҙҙең Баймаҡ районында ла ер етерлек, әммә әлеге мәлдә ҡарауһыҙ йөрөгән йылҡы малы хәүеф тыуҙыра. Халыҡта мал күбәйеүе, бер яҡтан, ҡыуанынслы күренеш булһа, икенсе яҡтан, улар айырым иғтибар талап итә, уларға тәғәйен ерҙәр һәм ҡараусы кәрәк була. Бөгөнгө тәртиптәр аҙыраҡ үҙгәрҙе. Хәҙер эшҡыуар булып эш башлаусыларға тәүҙән үк ерен һәм малын күрһәтергә кәрәк була.

**В. Әхмәтов:** Ошо урында ауыл биләмәләре етәкселәренә ҡағылышлы көләмәс һөйләп китәйем әле. Ысын булған хәл ул. Бер мәл бер ағай шылтырата: "Кустым, тиҙ генә диплом алырға ине", - ти. "Диплом алыу тиҙ генә булмай инде, ноп өйрәнгән бала. Ә уртаса уҡығандар иһә ҡыҙыҡ булмағанды тыңламай ҙа, хатта был турала уҡытыусының күҙенә ҡарап әйтергә лә мөмкин. Йәғни, беренсеһе үҙаллы түгел, икенсеһе нимәгә әүрәргә икәнде үҙе хәл итә. Отличниктар уҡыу өлкәһендә бөтәһенең дә яҡшы булыуына, барыһының да маҡтап ҡына тороуына күнеккән, насар уҡығандар әрһеҙ, әрләүҙе лә үткәрә ала, әллә ниҙә бер килеп эләккән "бишле"гә лә ҡыуана белә. Йәғни, киләсәктә, оло тормошта улар ауырлыҡтарҙы һәм стрестарҙы төрлөсә ҡабул итәсәк. Отличник беренсе ауырлыҡтан бөгөлөп төшәсәк, ә оролоп-бәрелеп өйрәнгәне, был ғына донъя ахыры түгел, иҫтәре китмәгәндәр күберәк үҙаллы, йә ололарының ваҡыты булмаған, күп балалы, аҡса етешмәгәнерәк ғаиләләрҙән сығыусан. Шунлыҡтан, икенселәренең йәшәү өсөн көрәш тәжрибәһе лә күберәк, улар әрһеҙерәк тә, рухи яҡтан көслөрәк тә булып үҫеп етәләр. Бына шундай ҡыҙыҡ ҡына күҙәтеүҙәр бар.

**Эшҡыуарлыҡ өлкәһендә күтәрелештәр ҙә, түбән ҡолауҙар ҙа аҙ түгел, тинегеҙ, ә бына шундай ҡанаттар төшөп киткәндә, артабан барырлыҡ көс табылмаҫ кеүек тойолғанда ни эшләйһегеҙ? Ниндәй саралар ярҙам итә?**

**Р. Әхмәтов:** Әйттем инде, бик тә сабырлыҡ һынып, артыҡ йонсоп киткәндә беҙ ҡатыным Гөлдәр Ишҡыуатова менән йыйынабыҙ ҙа берәй ергә концертҡа йәки театрға китәбеҙ. Фермала, эштә йөрөгән төҫөбөҙҙө баштан-аяҡ алмаштырып, бөтөнләй икенсе ҡиәфәттә, биҙәнеп-төҙәнеп, балҡып барып йөрөп ҡайтабыҙ һәм бындай сығыштар ҙа беҙгә илһам өҫтәй. Унан беҙҙең бер яратҡан йомағыбыҙ бар. Ул ҡыҫҡаса түбәндәгесә: бер күлдә тәлмәрйендәр йәшәгән. Күл бер мәл ҡороған һәм был тәлмәрйендәр алдына нисек итеп тау аша яҡкан икенсе күлгә күсеү бурысы килеп баҫҡан. Төрлөсә уйлай былар, һәр кем үҙ фекерен әйтә, бәхәс, ғауға... Шулай ҙа юлға сығалар. Юлда ла берәү "юҡҡа

# ЭШҠЫУАРҘАРЫ -

## юл кешеләре улар

күтәрелгән ир-егеттәр "Башҡорт байыһа, бисә ала" тигән принцип менән "байҙарса" ҡыланып ташлап, ғаиләләрен юғалтҡандары ла булды. Ул байҙарҙың ниндәйҙер өлөшө байлығын кәйеф-сафаға ебәреп, эсеп, аҙып-туҙып юғалып ҡалды. Бер өлөшө рәшәткә аръяғына ла инеп китте. Бик аҙҙары, хатта бармаҡ менән һынарлыҡтары ғына эйәрҙә ҡала алды һәм бөгөн улар инде ейәндәрен эшҡыуарлыҡҡа өйрәтеп маташа. Аҡса таба белеү ҙә үҙенә күрә бер һынау, күрәһең.

**Ни өсөн "Бай" үҙенең продукцияһын Урал аръяғынан Өфөгә алып килеп һата?**

**Р. Әхмәтов:** Урал аръяғында ике бәләкәс ҡала, эргә-тирәләге бөтөн ауылдар шул ҡалаларҙа һатыу итә. Әгәр беҙ ҙә барып ҡыҫылһаҡ, уларҙың ашына өлөш булып инәбеҙ йәки бөтөнләй ашһыҙ ҡалдырып та ҡуясаҡбыҙ. Был эш бары тик изге ниәттәрҙән генә сығып башҡарыла. Унан килеп, баш ҡаланың халҡы ла миллионлаған, унда ауылда етештерелгән тәбиғи аҙыҡ-түлеккә һорау ҙа күп, сауҙа урындары ла етерлек. Ҡимmәтерәккә төшһә лә, был юл беҙгә лә, Урал аръяғы халҡына ла яйлыраҡ.

**Ауыл эшҡыуарҙарына ауыл хакимиәте, район етәкселеге менән берлектә хәл итә торған иң беренсе сетерекле мәсьәләләр нимәләр улар?**

**Р. Әхмәтов:** Иң беренсе ер мәсьәләһе алға килеп баҫа. Ер аҙ түгел ул беҙҙә, етерлек, әммә күп осраҡта уның эшкәртелмәй, ташландыҡ булып ятыуы мөһимерәк булып сыға. Етәкселәрҙең һәр кеме үҙ урынында ниндәйҙер кимәлдәге түрә һәм һәр береһе үҙенең мөһимлеген иҫбатларға теләй. Эшҡыуарҙарға бер киҫәк ер алыу өсөн дә аҙаплы юл үтергә тура килә.

унының өсөн уҡырға кәрәк",- тием. "Уҡып торорға ваҡыт юҡ, ауылда силсәүит булайым тигәйнем, шуның өсөн генә кәрәк диплом", - ти был. Бына ошондай кимәлдәге етәкселек тә бар һәм, әлбиттә, ундайҙарҙан ауыл йәшәйешен үҫтереүгә фәтеүә аҙ. Шулай ҙа хәҙер заманалар ҙа, етәкселеккә талап та үҙгәрә, уларҙың аңлылары халыҡ менән бергә атларға ынтыла. Шунлыҡтан, ауыл эшҡыуарҙарына ла был осраҡта бергә булып, бер-береһен төрлө хәл-ваҡиғаларҙа күтәрмәләп, ярҙам итеп, етәкселәргә лә бергәләп мөрәжәғәт итеп эш алып барыу фарыз. Ауыл хакимиәтенә лә эшҡыуарҙар бер ярҙам ғына бит, әгәр үҙҙәре дөрөҫ мөнәсәбәт тота белһә. Нимәлер үткәрә икән - ярҙам, нимәлер ойоштора икән - бағыусы, тигән кеүек. Аҡыллы етәксе быларҙы үҙе лә белергә тейеш.

**Көләмәс темаһын дауам итеп, мәктәп "отличниктары" тормошта "икелеләргә" яллаһып эшләй, тигән әйтем дә бар бит әле.**

**В. Әхмәтов:** Был нимәнән улай килеп сыға? Мәктәптә отличник булған бала - ул уҡытыусыны тыңлап, уға буйһоноп ти ҙә, артабан еләсәк. Отличниктар барыһын да үҙҙәре эшләп, барлыҡ көсөн һәм ваҡытын нимәнелер килтереп сығарыуға бағышлаясаҡ, ә тегеһе был эште башҡарыуға икенселәрҙе файҙалансаҡ. Һәм киләсәктә был ике кеше башҡалар менән етәкселек итеүҙә лә ошо уҡ ысулдарын ҡулланасаҡ. Бына ошондай миҫалдарҙы күп килтерергә була. Күҙәтеүҙәр буйынса, отличниктар улар әпәүлерәк, ата-әсәһе ныҡ иғтибар иткән, ҡурсыулы ғына балалар була. Ә уҡыуға



***Бөгөн беҙ эшләү һәм эшһеҙ ҡалыуҙы шул тиклем хөкүмәткә бәйле итеп кенә ҡабул итәбеҙ. Йәғни, тик хөкүмәткә, дәүләткә генә эшләп була, тигәнде башыбыҙға һеңдергәнбеҙ. Ә эшләү ул, ғөмүмән, тәнде физик рәүештә йәки башты аңлы рәүештә хәрәкәттә тотоу, шул хеҙмәт арҡылы ҡәнәғәтлек, файҙа алыу, шул рәүешле үҫеү ул. Кеше ошолай эшләү рәүешенән яҙа икән, уның тәнендә лә, аңында ла кире реакция китә. Ҡыҫҡаса әйткәндә, деградация башлана. Ауыл ерендә, мәҫәлән, хужалыҡта мал тотоу ғына ла үҙе үк ҙур хеҙмәт талап итә. Хужа иртәнән-кискәсә шул малды тәрбиәләү, ашатыу маҡсатында әллә күпме эш-хәрәкәт башҡара. Шул хеҙмәте барышында ул төрлө эмоциональ торошҡа инә, әллә күпме уйҙар уйлай, ыңғай тойғолар кисерә. Йәки баҡса сәсеү ҙә һине яҙ-йәй-көҙ буйына ҡыбырлата. Йәки уҡыу ҙа - хеҙмәт, спорт менән шөғөлләнеү ҙә хеҙмәттең бер төрө булып тора. Кешене үҫешкә алып бара икән - был хеҙмәт.***

сыҡтыҡ", икенсеһе "үлеп бөтәбеҙ", өсөнсөһө "һыуһайбыҙ", дүртенсеһе "кире боролайыҡ", бишенсеһе... Кире боролғандары ла, "барыбер үләбеҙ" тип ятып үлгәндәре лә, эт-ҡош еме булғандары ла, арып тороп ҡалғандары ла булған һәм, ахырҙа, бер генә тәлмәрйен теге күлгә барып еткән. "Нисек улай?" тигән һорауҙы бирәбеҙ беҙ шулай аптыранып, ҡаршылыҡтар алдында ҡаушап ҡалғандарға. Яуабы былай: теге тәлмәрйен һаңғырау булған һәм бер шикләнеүҙәрҙе лә, бәхәстәрҙе лә ишетмәгән, шунлыҡтан, уйламаған да, ҡурҡмаған да. Ә бары алға ҡуйылған маҡсатҡа табан китеп тик барған.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ысынлап та, был тәлмәрйен күптәргә өлгө булмаҡсы. Һәм һәр ауыл эшҡыуарына ошо тәлмәрйен һәм "Бай" кооперативындағы егет-ҡыҙҙар кеүек ныҡышмалы, талымһыҙ, ҡыйыу һәм маҡсатлы булып йәшәү, эшләү, уңыштарға өлгәшеүҙәр теләйбеҙ. Еңел булмаған юл һайлаған кешеләр улар ауыл эшҡыуарҙары. Белеүебеҙсә, тауға илткән юлдар бер ваҡытта ла еңел булмай.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

*ӘЙТКӘНДӘЙ...*

## АУЫЛ ЭШҠЫУАРЫНА ЯРҘАМ

2019 йылда республика фермерҙарына 1,1 млрд һум күләмендә грант бүлеү ҡаралған. Уның 740 млн һумы федераль бюджет иҫәбенән. Бөгөнгә Башҡортостанда 6,5 мең фермер хужалығы эшләп килһә, үткән йыл һөҙөмтәһе буйынса улар тарафынан етештерелгән дөйөм продукция хаҡы 17,5 млрд һумлыҡ тәшкил иткән. Был күрһәткес буйынса беҙҙең республика Волга буйы федераль округында 3-сө урында килә.

Былтыр Башҡортостанда табыш килтереүсе проекттарҙы тормошҡа ашырыу буйынса яңы программа старт алды. Ул шәхси хужалыҡтар һәм башҡа төр продукция етештереүселәрҙе ауыл хужалығы ҡулланыусылары кооперативына берләштерә. Тап ошо программа ярҙамында былтыр 118 яңы кооператив ойошторолдо. Был күрһәткес буйынса Башҡортостан лидер төбәк. Яңы барлыҡҡа килгән кооперативтар дөйөм алғанда 300 млн һум күләмендә грант алды.

2020 йыл аҙағына йәнә 450 ауыл хужалығы кооперативы төҙөү планлаштырыла. Уларға 4,5 мең хужалыҡты йәлеп итеү күҙаллана.

Башҡортостан предприятиелары һәм фермерҙарына быйыл йылҡысылыҡты үҫтереүгә 100 миллион һум самаһы аҡса бүленә. Ауыл хужалығы министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Башҡортостан илдә аттар һаны буйынса алдынғылар рәтендә. Ҡымыҙҙы тулайым етештереү күләмендә төбәктең өлөшө 45 процентҡа етә. Йылҡыларҙың күбеһе - Урал аръяғында. 2018 йылда республикала 121 мең ат иҫәпләнгән, алдағы ике йылда йылҡы иҫәбен меңгә арттырыу бурысы ҡуйылған.

***✓ Онота алмаймы ул Зәлифәһен, әллә шул исем менән бербөтөн булып ҡалған тыуған илен һағыныуы шулай тәҡәтһеҙ итәме? Терелеген белә лә алмай ҡалған, уны юғалтҡан әсәһе, туғандары алдындағы ғәйебеме был?***

Вася һаман өнһөҙ.

- Һин был килеш, мин дә инде... сәләмәт ҡатын-ҡыҙға ымһына алмайбыҙ. Унан килеп ҡайҙа башҡа ҡатындар? Был урындан беҙ ҡайҙа китә алабыҙ? Зинаида ла шул уҡ... Һуң, аяҡтар юҡ тип ятып үлеп булмай ҙа инде. Һин бит үҙең мине "йәшәргә кәрәк" тип өйрәтәһең, Вася...

Ниһайәт, Вася ла телгә килә:

- Еңел уйлайһың һин, Ромка. Һиңенсә бөтә нәмәне лә тотоп һындырып була. Беренсенән, Зинаидаға минең кеүек имгәк нимәгә? Икенсенән, ул хәтирәләренә шул тиклем тоғро. Өсөнсөнән... ҡуй, юҡты...

- Вася! Шым әле!Мин бит һине тыңлайым, һәр ваҡыт һүҙҙәреңә ҡолаҡ һалам. Был юлы һин мине тыңла. Һин Зинаға имгәк түгел, ә киреһенсә, терәк һәм таяныс буласаҡһың. Ә хәтирәләрен иҫләһен әйҙә, уларҙың ни зыяны?

- Ә яратыу? Ул ҡатындың миңә исмаһам аҙ ғына булһа ла берәй тойғоһо булырға тейештер бит? - Вася ҡулдарын ике яҡҡа йәйеп үк ебәрҙе.

- Зинаның һине яҡын күреүен барыһы ла аңлаған инде. Һин дә уға битараф түгелһең, шулай бит? - Рамаҙан эйелеп дуҫының битенә үк төбәлде. Вася уңайһыҙланғандай итһә лә, дөрөҫөн һығып сығарҙы:

- Эх, дуҫ... Зинаида кеүек ҡатындан кем баш тартһын? Мин уның бер яғымлы ҡарашы өсөн шул китапхананың анау тау үренә мендереп ҡороп бирергә ризамын.

Был хәбәрҙән Рамаҙан оҫтахананы яңғыратып көлөп, иптәшенең яурынына тос йоҙрого менән төртөп ебәрҙе:

- Ғашиҡ булғанһың бит һин! Өндәшмәй генә ғашиҡ булып йөрөгәнһең!

Вася ла тауышһыҙ ғына һелкенеп көлгән булды, үҙе ризалығын белдереп башын ҡаға.

- Былай булғас, беҙ был эште һуҙмайбыҙ, давай, тотабыҙ ҙа егеттәрсә хәл итәбеҙ, - Рамаҙан ҡулдарын һелтәп дәртләнеп үк китә лә, арба тәгәрмәстәрен дыһырлатып иҙән буйлап ҡыҙыу-ҡыҙыу йөрөй үк башлай.

- Нимә хәл итәһең? - Вася аңламай әле.

- Нисек "нимә"? Барабыҙ! Һоратабыҙ!

- Нимә "һоратабыҙ"? - дуҫының күҙҙәре аптырауҙан түңәрәкләнгән.

- "Нимә" түгел, ә "кем"! Зинаиданы барып һоратабыҙ! Нимә аңшайһың ул? - Васяның аңламағанына Рамаҙандың йәне көйә үк башлай.

- Нимә һөйләйһең һин? Ундай эш шулай тота килеп башҡарыла тиһеңме? Кем һората, мәҫәлән, кем шулайтып йөрөй? - Васяның да ҡаштары емерелә.

- Ә нисек башҡарыла? Көҙ буйы, ҡыш буйы ымһынып йөрөнөң, хәҙер тағы күпме баш баҫаһың? Һин мәшәүләнгәнсе башҡаға ла сығып китер әле. Бында уны алырға теләүселәр быуа быуарлыҡ. Ә ул һиңә ҡапланған.

Вася тағы ла шымып ҡала, бер башын ыуалай, бер устарын.

- Кем тип... бына - мин! Барам да мин һоратам! - тип ысҡындырғанына үҙе лә аптырай биргәндәй булды ла Рамаҙан, тик инде әйткәненән баш тарта алмай ине.

- Һи-ин?.. - Вася усы менән маңлайын баҫты.

- Мин! Нимәм бармай яусыға? Телем бар, башым бар, аяғым ғына юҡ инде, - тип көлкөгә һабыштырып та маташты. Тик дуҫында шаярыу ҡайғыһы түгел. Рамаҙандың ниәтенә ҡаршы килгеһе лә килмәй, әммә шул уҡ ваҡытта үтә ҡаушап төшкән. Күҙҙәре мөлдөрәп, өмөтләнеп ҡарай, ә теле төптө икенсене һөйләй:

- Ризалашмаҫ ул... Ҡыуып сығарһа?.. Ә? Нишләрбеҙ унда, Ромка, ә?

- Ҡыумай! Күр ҙә тор бына! Все - хәл ителде, бөгөн киске аштан һуң барам да инәм.

* * *

Киҫкә Рамаҙан Зинаида Захаровнаны китапханаһында эҙләп тапты. Ҡатын һаман да өҫтәл артында, һаман да кемдәргәлер нимәләрҙер йүнләп хаттар яҙыу менән мәшғүл ине. Бында йыш ингән, шулай ҙа артыҡ һөйләшеүгә әүәҫ булмаған был икенсе милләт егетен ҡатын яҡын күрә лә, тегеһе тартынамы, ситһенәме шунда - артыҡ ылыҡмай. Ҡырағайыраҡ, томһараҡ шул. Әле элеккесә сәләмләшеп кенә кәштәләр араһына үтмәне, ә нимәлер әйтергә теләгәнен белдерә булып ҡаршыһына килеп үк ултырып алды. Ҡатын уға һораулы ҡараш менән төбәлде. Был ҡараштан егет бер аҙ уңайһыҙланғандай итте, шулай ҙа күҙҙәрен шылдырманы, үҙенә үҙе дәрт өҫтәгәндәй тамаҡ ҡырып һүҙ башланы:




- Зинаида... Зинаида Захаровна...

- Эйе, - Зинаида уның ауыҙына текәлеп артабанғы хәбәрен көттө.

- Зинаида Захаровна...

- Эйе, мин Зинаида Захаровна, инде утыҙ биш йыл исемем шулай, -тип йылмайҙы ҡатын.

Һәр саҡ етди, хатта уҫалыраҡ та булып күренгән ҡатындың ирәбе йылмайыуынан яусының да күңеле йылынып китте лә, был ыңғай мәлде файҙаланып ҡалырға ашығып, бутала-бутала бер тында сығарҙы ла һалды:

- Мин һеҙҙең ҡулығыҙҙы һорайым, Зинаида Захаровна. Ҡатын булырға... бер ғаилә булып йәшәргә тип.

Зинаида ҡапыл артҡа тартылып усы менән ауыҙын баҫты, күҙҙәре түптүңәрәк булды.

- Василий Егорович ул бик һәйбәт кеше... ул оҫта... уның күңеле матур... һеҙ уны үҙегеҙ ҙә һәйбәт беләһегеҙ бит инде... Шәп кеше ул!

- Уффф! Василиймы ни? - шул саҡ ҡатын ике ҡулын ҡалҡыу түшенә ҡуйып сайҡалғандай итте, - Мин әллә һин кейәүгә саҡыраһыңмы тип ҡотом осто!

Рамаҙан да хатаһын төҙәтә һалды:

- Юҡ-юҡ, мин түгел! Василий Егорович! Мин унан яусы булып килдем... Яусы мин...

- Яусы? Ай, хәтәр яусы икәнһең! Ну, яусы... - тип рәхәтләнеп көлдө хәҙер яңы ғына ҡобараһы осҡан Зинаида. Күҙҙәренән йәш сыҡҡансы көлдө. Унан ҡапыл көлөүе үкһеүгә әйләнеп китеп, битен устары менән япты ла, һыңҡылдап шымып ҡалды. Рамаҙан ынтылып яурынынан ҡағырға теләп ҡулын һуҙҙы ла, ҡыймайса кире алды.

- Зинаида... Захаровна... юҡ булһа... "юҡ" тип әйтегеҙ, тик иламағыҙ... зинһар...

Зинаида йөҙөнән устарын алды, юҡ, иламай ине ул, һәр хәлдә төҫө үҙгәрмәгән. Көлмәй ҙә ине, асыуланмай ҙа. Нисектер йыуашайып киткәндәй булып ултыра. Рамаҙанға текәлеп, уйсанланып китеп ултыра. Егет тә унан күҙҙәрен алмай, өмөтләнеп тексәйгән.

- Йә, нимә көтәһең минән? - йылмайғандай ҙа үҙе, - Әйт дуҫыңа, килһен - һөйләшәйек. Яусылап кәмит ҡороп йөрөүегеҙҙе әйтәйем.

Ауыҙы ҡолаҡтарынаса йырылған Рамаҙан һикереп торҙо:

- Есть, иптәш командир! Хәҙер үк килеп ет?!

- Бөгөн үк тимәйем инде, иртәгә лә мөмкин, - Зинаиданың артынан ҡыҫҡырып ҡалыуын ҡолағына ла элмәй елдерҙе генә "танкист". Дуҫын ҡыуандырырға ашыҡты.

* * *

Аҙна-ун көндән Валаам ғәриптәр пансионаты тарихында шаулап-гөрләп беренсе туй үтте. Василий менән Зинаида, уларҙан баш тартҡан йәмғиәткә үс итеп, ә бәлки, бары бәхеттәре асылыптыр, үҙ йәмғиәтендәге яңы башланғысҡа тәүге аҙымды яһаны.Туйҙан һуң ташландыҡ бүлмәләрҙең береһен емереклектән бушатып, таҙалап-аҡлап, кәрәкле йыһаз-фәлән әтмәләп алып инделәр. Барыһы ла йүгерешеп йөрөп ярҙамлашты, пансионат етәкселеге лә өлөш индерҙе, директор менән баш табип шәхсән бүләк яһанылар.

Был хәлдән һуң Рамаҙанға ғына "яусы" ҡушаматы оҙаҡҡа йәбешеп ҡалды. Уның яусылап йөрөүен Зинаида ҡыҙҙарға ҡайтып мәрәкә итеп һөйләгән дә, тегеләре хәҙер шунан ҡыҙыҡ табып, егеткә күргән һайын ябырылалар:

- Миңә ҡасан яусы булып киләһең, Ромка?

- Миңә лә, Ро-ом? Зинһар, миңә лә кейәү табып бирсе?

- Басурман булһа ла ярай, Ромка?! Ҡасанға көтөргә һине?

- Хи-хи-хи!

- Иһа-һа-һай!

Рамаҙан иһә яурындарын һикерткеләп йылмайып тороуҙан аша үтә алмай. Һүҙ көрәштереү бында урынһыҙ. Был халыҡты шаярыуҙа еңеп буламы ни?

Ошо урында тағы ла алға китә биреп һөйләгәндә, Василий менән Зинаида ғаиләһендә бер-бер артлы дүрт ир бала тыуып үҫеп, Валаам пансионатының беренсе ерле граждандары булалар һәм уларҙың береһе журналист булып, атаәсәһенең хәтирәләрен яҙып ҡалдыра.

## Люба

Василий менән Зинаиданың өйләнешеүе, улай ғына ла түгел, Зинаның етешә барған ҡорһағын һаҡ ҡына итеп арбаһында тирбәтеп алып йөрөүе, ҡояш булып балҡыған йөҙөнән оялсан йылмайыу китмәүе һәм тағы ла әллә күпме ябай күҙгә күренмәгән, әммә күҙәтеүсән ҡатын-ҡыҙ ҡарашынан йәшеренә алмаған үҙгәрештәр әлеге ҡатын-ҡыҙҙы ҡуҙғытып ебәрҙе. Уларҙа ла ир ҡатыны булыу, әсәлек хистәрен татыу, һөйөлөү, кемделер тәрбиәләргә, ҡайғыртырға теләү кеүек тәбиғи тойғолар уянды. Ғәрип ҡалып, ошо утрауҙа көн итеүгә дусар булыуҙарын ҡәһәрле яҙмыш тип уйлаған уйҙары ҡырҡа үҙгәрҙе. Сатырлап кипкән тупраҡтай ярғыланған күңелдәренә өмөт нуры үтеп инеп, шул нурҙан тулышҡан хыялдары был ҡоролоҡто шифалы һыу булып һуғарҙы. Былай ҙа тамшанып ҡараған йыйын берәҙәк ир-егетте уғата ымһындырып, тағы ла матурыраҡ, сағыуыраҡ, хуш еҫлерәк булырға тырыштылар. Быға саҡ үҙҙәре кеүек үк бисаралар итеп кенә ҡараған егеттәрҙе, ир-атты һынап баҡты, оҡшағандарын ылыҡтырыр юлдар эҙләне, ҡайҙалыр алда бәхетле бер донъя барлығын күҙ-ҡараштары менән дә вәғәҙә итте ҡатын-ҡыҙ. Әлбиттә, ир халҡы быға ҡапты, ҡапты ғына түгел, алды-артын абайламай ынтылды, ымһынды, көнләште, ғауғалашты. Шундай юлдарҙы үтеп, һүҙҙәре һәм үҙҙәре килешкән бер нисә пар ҡушылып та ҡуйҙы.

Люба ла ылыҡҡандан ылыҡты Рамаҙанға. Китапхананан яҡшы китаптар алып килеп бирһенме, ашағанда иңен иңгә терәй биреп йәнәшә ултырһынмы, хор репетицияларында, сәбәп тапҡан булып, яурынына, ҡулбашына ҡағылһынмы, күлдәктәрен йыуып, үҙенең тәмле еҫен һеңдереп алып килеп бирһенме... Башын юғалта яҙып, юғалта яҙып ҡуя Рамаҙан. Бер көн килеп тыйыла алмаҫ, янында бөтөрөлөп йөрөгән ҡыҙҙы ынтылыр ҙа ҡосағына ҡыҫыр кеүек. Тик ошолай уйлауы була, күңеленең иң төбөндә ниндәйҙер ҡаршылыҡ уяна ла, ул тау өҫтөнән тәгәрәп килгән ҡар тубылай ҙурайып килеп алҡымына тығыла. Унан инде төҫө лә юйыла барған бер йөҙ күҙ алдынан үтеп, исеме теш тәре араһына ҡыҫыла: Зәлифә-ә...

Онота алмаймы ул Зәлифәһен, әллә шул исем менән бербөтөн булып ҡалған тыуған илен һағыныуы шулай тәҡәтһеҙ итәме? Терелеген белә лә алмай ҡалған, уны юғалтҡан әсәһе, туғандары алдындағы ғәйебеме был? Уларҙы мәңгелек көтөүгә дусар иткән ғорурлығымы шулай юлын быуа? Аңламаҫһың...

Өркәк ҡоралайҙай ҡара һылыу һөйгәне әллә өндә, әллә төштә генә булғандай хәҙер уға. Был заманға тиклем кейәүгә сыҡмай ҙа ултырмағандыр, күптән бала-сағалылыр ҙа, Рамаҙанды уның кеүек алыҫ үткәндең бер матур өлөшө итеп кенә хәтерләйҙер. Зәлифә юҡ, Зәлифә, бәлки, булмағандыр ҙа. Ә Люба бар. Ул янда ғына. Ҡосағына алғанды, тыны менән иреткәнде көтөп, бер ишара-ымын ғына һағалап йөрөй. Мәрйә булһа һуң... Сибәр бит, хатта үтә сибәр. Йылымыҡ, иркә, йомшаҡ һүҙле килеп. "Милый мой, дорогой" тип өҙөлөп тора. Ғәрип булһа һуң... Рамаҙан да инде һикереп һыбай менер хәлдә түгел. Бер-береһен үҙҙәренән яҡшыраҡ аңлаған кеше табылмаҫ. Кемдеңдер һөйәркәһе булһа һуң... Ул ваҡыттары күптән үткән бит инде. Мөхәббәте лә янып көлгә ҡалғандыр, ғазаптары ла баҫылғандыр, күрәһең. Рамаҙан үҙе яратманымы һуң? Күпме төндәрен мендәргә ҡапланып, тауышһыҙ үкһене... Зәлифәне икенселәр ҡулына ҡалдырыуынан ғәййәр ялҡындарҙа янды. Аҙ булдымы шул йылдары? Һуғыштан алдан, һуғышты... унан һуңғы йылдарҙы бергә иҫәпләгәндә генә лә ун ике йылдан ашҡан. Һаман да шул исем тота бит үҙен, һаман да икенсе ҡатын-ҡыҙға яҡын юлатмай... "Булһа һуң" тип ярлыҡай ул Любаның бар кәмселектәрен дә. Серыйға ла шулай тип яуапланы. Уныһы баштан уҡ Любаға күҙ һалғайны ла, ҡыҙҙан иғтибар ала алмағас, уның һуғыш тарихын сурытып-күпертеп һөйләп сығарҙы. Хатта Рамаҙанды ла туҡтатып кәңәш биргән булды.

**(Дауамы бар).**

ӨФӨ БАШҠОРТО

# ОЛОҒАЯ КИЛӘ...

## башҡортлоҡҡа нығыраҡ тартылам

**Журналист булып эшләгән йылдарҙа төрлө кешеләр менән осрашырға, әңгәмәселәрҙең төрлөһөн күрергә тура килә. Әгәр телевидение, радио хәбәрселәре саф башҡорт телендә һөйләшкән әңгәмәсе эҙләп бер булһа, баҫма матбуғат хеҙмәткәрҙәренә ул яҡтан әллә ни ҡыйынлыҡ юҡ - "телдәр бутҡаһы"нан да башҡортса матур мәҡәлә әҙерләргә була. Әммә бөгөнгө әңгәмәсем ундайҙарҙан түгел, уның менән рәхәтләнеп ултырып, ауыҙ тултырып саф башҡортса һөйләшергә мөмкин. Шулай итеп, рубрикабыҙҙың сираттағы геройы, "Вечерняя Уфа" гәзитенең баш мөхәррире, журналист Вячеслав ГОЛОВ.**



➔ **Уйлап ҡараһаң, һеҙ манҡорт булып йөрөгән байтаҡ башҡортҡа ҡарағанда ла башҡортораҡ. Күптәр менән әңгәмәне русса алып барырға тура килә, ә һеҙҙең менән, ҡатнаш ғаиләлә тыуыуығыҙға ҡарамаҫтан, рәхәтләнеп үҙебеҙсә һөйләшәбеҙ. Башҡорт телен күп башҡорттарҙан яҡшыраҡ беләһегеҙ. Ике милләткә лә бер тигеҙ һөйөү йөрөтөрлөк тәрбиә серениҙә?**

- Хатта әсәйемдән көлә торғайным әле. Уны телевидениеға төрлө тапшырыуҙарға саҡырып яҙҙыралар ҙа, һуңынан тапшырыуҙы ҡарайбыҙ, мин уға: "Әсәй, һин телмәреңдә миңә ҡарағанда күберәк русса һүҙҙәр ҡыҫтыраһың икән", - тием. Ысынлап та, ул һөйләшкәндә яртыһын русса, яртыһын башҡортса әйтә торғайны. Ә мин башҡорттар менән башҡортса, рустар менән русса һөйләшәм. Башҡорт телен яратыуым атайымдан - Башҡортостандың халыҡ артисы Николай Головтан киләләр, моғайын. Ул үҙе рус милләтенән булһа ла, башҡорттар өсөн күп эшләне. Вафат булғас, уны иҫкә алғанда: "Я не знаю другого русского, который столько сделал для развития башкирской эстрады", - тигәйнем. Ысынлап та, ул Башҡортостанда "Өфө уттары" исемле тәүге башҡорт милли профессиональ эстрада-инструменталь ансамблен ойоштороусы һәм уның художество етәксеһе булды бит.

Атайым башҡорттарҙы бик яратты. Һәр ваҡыт: "Башҡорттар тура һүҙлеләр: оҡшаһа ла әйтә, оҡшамаһа ла әйтә, хәйләкәр түгелдәр", - тиер ине. Ул әсәйемә: "Балаларға ғаиләлә тәүҙә башҡортса һөйләшергә өйрәтәбеҙ", - тип әйтеп ҡуйған. Атай-әсәй гастролгә сығып китһә, беҙгә Ейәнсуранан өләсәй йәшәргә килә, мин балалар баҡсаһына йөрөмәнем, өләсәй менән өйҙә туҡмаслы аш ашап, сәй эсеп кенә үҫтем. Шуға беренсе телем - башҡорт теле, тиһәм, һис артҡыуы түгел, дөрөҫөрәк булыр. Сөнки өләсәй бер ауыҙ һүҙ ҙә русса белмәй ине. Хатта 5-6 йәш тирәһендә мин дә русса акцент менән һөйләшә торғайным әле. Атайым өләсәйемде шул тиклем ныҡ яратты, хатта гастролдәрҙән уға ғәрәп хәрефтәре менән хаттар яҙа ине. Уның башҡорт телен, мәҙәниәтен яратыуы, ихтирам итеүе беҙгә лә күскәндер.

Уны, ғөмүмән, рус кешеһе тип ҡараманылар. Мостай Кәрим, Зәһир Исмәғилевтар, башҡа арҙаҡлы кешеләр килә, ял көндәрендә ҙур табын йыйыла торғайны. Бер ваҡыт атайым ҡурайҙа уйнарға өйрәнергә теләге барлығын белдерҙе. Гармунда уйнайым, баянда уйнайым, нишләп ҡурайҙа уйнамайым һуң, тигәс, Зәһир Исмәғилев ағай: "Кит, Наил, һин ғүмерҙә ҡурайҙа уйнай алмаясаҡһың!" - ти. "Мин уйнамайыммы? Бына бер айҙан һуң киләһең, мин ҡурайҙа уйнаясаҡмын", - ти. Зәһир ағай: "Һин ҡурай уйнаһаң, мин бейейем", - ти. Бер айҙан һуң атайым ҡурайҙа һыҙҙыра, Зәһир ағай ер һелкетеп бейей. Бына шундай башҡорт рухы аңҡып торған мөхиттә йәшәнек беҙ.

Хәҙер минән, һин кем, тип һорашалар, атайым яғынан - рус, әсәйем яғынан - башҡорт, тием. Паспортҡа башҡорт булып яҙылдым, сөнки әсәйем: "Улым, фамилияң да, исемең дә, атайыңдың исеме лә урыҫ, исмаһам, милләтемде минекен ал", - тине. Һуңынан, әлбиттә, "карьера яһар өсөн башҡорт булып яҙылған" тигән һүҙҙәр ҙә килеп етте. 16 йәшемдә ундай уй башыма ла инеп сыҡмаһа ла...

Олоғая килә барыбер башҡорт яғына нығыраҡ тарта барам шикелле. Йәш ваҡытта ниндәй милләттән икәнемде айырмайҙар ине. Хәҙер йәштәр мине урыҫ тип уйлай, ә бына урамда ололар осраһа, хатта ауылдан килгән булһалар ҙа, башҡортса һүҙ ҡушалар. Аптырап, минең башҡорт икәнемде ҡайҙан беләһегеҙ, тип һорайым: "Һуң, башҡорт икәнең йөҙөңдән күренеп тора бит!" - тиҙәр. Ололар минең башҡорт икәнемде нисектер тоя шулай...

➔ **Ә бына бөгөн балаларҙы башҡорт телендә һөйләшергә өйрәтеп булмай...**

- Өйрәнеү генә түгел, хатта аңламай ҙа улар. Беҙҙең ғаиләлә шунһыһы ҡыҙыҡ: ҡатынымдың да әсәһе - башҡорт, атаһы - рус. Кесе улыбыҙҙы, өйрәнер, тип башҡорт балалар баҡсаһына бирҙек. Әммә балалар баҡсаһында барыһы ла русса һөйләшә. Шулай ҙа иң хәүефлеһе - йәштәр русса аралаша. Стәрлебаш районында атайымдың мәктәп дуҫы - Рәшит ағай йәшәне. Атайым дингеҙгә, ял йорттарына йөрөмәне, отпускыһы етһә, гел тыуған яғына ҡайтты. Ғүмер буйына дуҫлыҡтарына тоғро ҡалдылар. Атайым вафат булғас та, уларға балаларымды алып, мин дә ҡайтып йөрөнөм. Төндә тәҙрә асыҡ, йәштәр уйынға клубҡа сыға. Барыһы ла русса һөйләшергә маташалар. Оят бит был! Тороп, эргәләренә барып: "Ни өсөн үҙегеҙҙең телегеҙҙә аралашмайһығыҙ, ватаныгыҙҙа русса һөйләшергә тырышаһығыҙ. Һеҙҙең бит туған телегеҙ бар. Бер ауылдыҡыһығыҙ, матур итеп үҙ телегеҙҙә һөйләшегеҙ!" - тип әйтке килә хатта. Улар, мин русса һөйләшәм, мин ниндәй "текә", тип уйлай инде үҙенсә, йәнһе лә, шулай абруй арттыралар.

➔ **Тарихта һәр ваҡыт атайҙар һәм балалар проблемаһы ҡуҙғатылған һәм ул бөгөн дә дауам итә. Ни өсөндәр ололарға һәр ваҡыт йәштәр насар кеүек күренә. Бөгөн йәштәр телде өйрәнмәй тип асыуланабыҙ... Был нилектән шулай?**

- Бәлки, минә шулай тойолалыр, әммә беҙҙең быуын менән сағыштырғанда бөгөн йәштәр сәләмәт тормошто һайлай. Улымдың дуҫтары берәһе лә тәмәке тартмай, алкоголь эсемлектәре менән шаярмай. Һәр хәлдә, шулай икәненә ышанғым килә. Уларҙың яҡшы яғы шул. Үҙҙәренең ниндәйҙер ҡыҙыҡһыныуҙары бар, ләкин нимә аптырата - күҙҙәрендә осҡон юҡ. Улым олатаһы юлынан китеп, музыкант, әммә әҙәләп китеп, йәне-тәне менән бирелеп уйнағанын күрмәйем. Шунан, уларҙың ҡыҙыҡһыныуы - компьютер. Бөтөн тормош бөгөн виртуаль донъяла бара.

Хәйер, йәштәрҙә һәр ваҡыт әрләйҙәр. Беҙ йәш саҡта беҙҙе лә әрләйҙәр ине. Йәштәр насар түгел, бары тик улар икенсе формация кешеләре. Һәм уларҙың беҙҙән төп айырмаһы нимәлә - улар китап уҡымай. Уҡыйҙар, интернеттан ғына, ә унда нәфис әҙәбиәт юҡ. Шулай ҙа мин уларҙы аҡлайым: беҙҙең заманда китаптан башҡа бер нәмә лә булманы. Шуға, көнө-төнө китап менән йәшәнек, хатта кисен, утты һүндер, тип теңкәгә тейәләр ине. Әммә беҙ одеял аҫтына йәшенеп, фонарь яндырып булһа ла, ҡомһоҙланып китап уҡыныҡ.

Фатирыбыҙҙа, моғайын, 3 мең тирәһе китап барҙыр. Ҙур залдың бер стенаһы иҙәндән түбәгә тиклем китаптар менән тулы. Атай-әсәйем китап уҡырға яратты. Бер яҡтан ҡараһаң, артистарға нимәгә ул китап уҡыу, тиергә лә мөмкин, әммә әсәйем барлыҡ рус, сит ил классиктарын уҡып сыҡты. Атайым да, апайым да бик күп уҡынылар. Беҙҙең өсөн китап - ҙур һәм бөйөк тәшөнсә булды.

Ул заманда төндә сиратта тороп, төрлө баҫмалар алалар ине. Уның өсөн төнгө сәғәт өстә сиратты тикшерәләр. Ни өсөн тигәндә, китаптар йыйынтығы әҙ, алырға теләүселәр күп. Шуға, тикшереүҙе төнгө өстә үткәрәләр, бер тапҡыр килмәһәң, сираттан төшөп ҡалаһың. Кешеләр ҡаланың төрлө мөйөшөнән такси саҡыртып булһа ла киләләр. Китаптың, баҫма һүҙҙең көсө һәм ҡәҙере шулай юғары ине.

➔ **Бөгөн яҙыусы тигән атаманы кем яҙа белә, шуларҙың барыһына ла йәбештерә лә ҡуялар. Ә беҙҙең заманда бит яҙыусылар күп булманы, әммә берәгәйле булды. Уларҙың ҡайһыһы хатта быуатҡа бер тыуғандыр. Бөгөнгө яҙыусыларҙың күптәре уртаҡул, тигән менән килешәһегеҙме?**

- Элек коммерция булманы. Китап сығарыу ҙа хөкүмәт кимәлендәге эш ине. Хәҙер аҡса түләйһең икән - хет аҙна һайын китап сығар. Уйлап ҡараһың, күптәрененң мәҡәләһен гәзиткә лә алмайһың. Ә улар китап яҙа! Теле лә матур түгел, фекере лә юҡ, әммә матур тышлыҡта сыҡҡан. Ике ай үттеме - икенсе китабы сыға. Интернетҡа тап шул контроль булмаған китаптар сыға. Китаптары булғас, уларҙы аптыраған көндән яҙыусы тиһең инде... Ундайҙарҙың һаны күбәйгән һайын, матур әҙәбиәт уҡыусылар, телде яратыусылар кәмей бара...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев премияһы лауреаты Фәкиһә Туғыҙбаеваның бер шиғырында шундай юлдар бар: "Шығрым тулы залда, йөрәкһенеп, башҡорттарға аңлатамын башҡортлоҡто…" Әңгәмә барышында ла ошо юлдар күҙ алдына килде һәм мейене быраулап торҙо. Бөгөн телмәрҙәрендә бер рус һүҙе ҡушмай саф башҡортса аралашҡан ике Вячеслав: Чернев һәм Голов телдең бәҫен күтәреп, уны һаҡлап, данлап ҡына ҡалмай, беҙгә, башҡортмон, тип күкрәк һуҡҡан башҡорттарға, ысынлап та, башҡортлоҡто аңлата!**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

✓ *Быға тиклем өйҙән көмөшкә һатыусыларға ни бары ике мең тирәһе генә штраф һалына ине. Был йәһәттән закон проекты ҡабул ителеү менән штраф күләме 30 меңдән 50 мең һумғаса арттырылды.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ИКМӘКТЕҢ...

## зыяны бармы?

■ Гарвард университеты ғалимдары билдәләүенсә, икмәккә консервант булараҡ өҫтәлгән пропионат һимереү һәм диабет менән бәйле гормон кимәлен күтәрә. Икмәк ашау һаулыҡҡа зыян килтерә тигән һүҙме был? Магазин икмәге консервантларға бай, тип аңлата белгестәр. Пропионатты икмәк күгәрмәһен өсөн өҫтәйҙәр. Тап ошо матдә диабетҡа һәм тән ауырлығы артыуға килтерә. Бындай һығымтаға кеше организмына көндәлек рәүештә икмәк менән инеп торған пропионат дозаһын лаборатор ҡомаҡтарҙа һынап ҡарағандан һуң килгәндәр. Тәжрибәнә һуңғараҡ кешеләрҙә лә үткәреп ҡарағандар, уларҙа ла метаболик тайпылыштарға килтереүсе гормондар үҙгәреше күҙәтелгән. Әммә Рәсәй ғалимдары сит илдәге коллегаларының был хәүефен уртаҡлашмай. "Икмәктә пропионаттан да зыянлыраҡ матдәләр табырға була", - ти технологтар. Уларҙың фекеренсә, пропионатты әсеү процесы булған бөтөн продукттарҙа ла ҡулланалар. Икмәк былай ҙа он һәм шәкәрҙән тора, тимәк, былай ҙа һимереүгә булышлыҡ итә.

■ Классик музыка кешенең хәтерен нығыта. Италияның Кьети ҡалаһы университеты тикшеренеүселәре "Вивальди тәьсире" тип аталған яңы күренеш асҡан. Ошо билдәле музыканттың "Йыл миҙгелдәре" тигән симфонияны өлкән йәштәге кешеләрҙең хәтерен нығытыуы асыҡланған, бының өсөн симфонияны даими тыңларға кәрәк икән. Фәнгә "Моцарт тәьсире" лә билдәле. Австралияның бөйөк композиторы Моцарттың музыкаһын тыңлаған бәләкәй балалар интеллектуаль йәһәттән тиҙерәк үҫешә. Совет ваҡытында гәзиттәр Чайковский музыкаһын "тыңлаған" һыйырҙар күберәк һөт бирә, тип тә яҙа. "Вивальди тәьсире" шуныһы менән дә айырыла, ул физик ауыртыныуҙы баса, уны ревматизм мәлендә тыңларға кәңәш итәләр.

■ Стресс гормоны - кортизол баш мейеһе эшмәкәрлегенә насар йоғонто яһап, хәтерҙең насарайыуына килтереүе ихтимал, тип яҙа Neuroscience журналы. Кортизол күләменең бер ваҡытҡа күтәрелеп алыуы һәйбәт, сөнки был мәлдә иғтибар көсәйә, ул кешегә тормош һынауҙарын еңеп сығырға ярҙам итә, тиҙ ҡарарға килеү һәләте барлыҡҡа килә. Әммә был гормондың даими рәүештә юғары кимәлдә булыуы кире эҙемтәләргә килтерә: аш һеңдереү менән бәйле проблемалар килеп тыуа, ауырлыҡ арта, ҡан баҫымы күтәрелә. Ғалимдар билдәләүенсә, стресс гормонының оҙайлы тәьсире һөҙөмтәһендә баш мейеһенең айырым өлөштәрендә нервы күҙәнәктәре ҡыҫҡара. Айова университеты психологтары фекеренсә, был гормон депрессия йәки хроник стресс кисергән пациенттарҙа осрай һәм улар етди дауалауға мохтаж.

■ Макгилла университетында ғалимдар баш мейеһенең төрлө тауыштарға реакцияһын тикшереп ҡараған. Эксперимент өсөн өс эмоция - ярһыу, шатланыу, һағышланыу алынған. Тикшеренеүҙәрҙә 25 кеше ҡатнашҡан, улар билдәле бер тауыштар буйынса кешенең эмоциональ торошон билдәләргә тейеш булған. Шатланыуҙы таныуы иң еңеле булған. шул уҡ ваҡытта ярһыу менән һағышланыуҙы айырыуы ауыр, әммә баш мейеһендә кеше ярһыған саҡта айырыуса оҙайлы әүҙемлек барлыҡҡа килә.

АЙЫҒАЙЫҠ, ЙӘМӘҒӘТ!



# БЫЛ ҺАҘЛЫҠҠА...

## балалар һәм йәштәр ҙә бата

**Эскелек, законһыҙ рәүештә спиртлы эсемлектәр менән һатыу итеүгә ҡаршы көрәш тормошобоҙҙағы иң көнүҙәк проблемаларҙың береһенә әйләнде. Бөгөн был мәсьәләне хәл итеүгә киң йәмәғәтселек кенә түгел, дәүләт органдары ла етди иғтибар бүлә, сөнки "йәшел йылан" ағыуы ҡоллоғона эләгеүселәр үҙҙәренә генә түгел, бөтә йәмғиәткә хәүеф тыуҙыра.**

Йыл һайын Рәсәйҙә 600 меңгә яҡын кешенең эскелек арҡаһында яҡты донъя менән хушлашыуын күҙ алдына килтерһәң, ә был иһә илебеҙҙең бер ҙур ҡалаһы тигән һүҙ, кешелек донъяһының ниндәй ҙур афәт алдында тороуын яҡшы аңлайһың. Был йәһәттән беҙҙең республикала ла хәлдәр маҡтанырлыҡ түгел. 2018 йыл һөҙөмтәләре буйынса, эскән килеш енәйәт яһау осрағы буйынса Башҡортостандың Рәсәйҙә беренсе урында тороуын, бер йыл эсендә 14 111 енәйәт ҡылыныуҙы миҫалға килтереү генә лә хәлдең ни тиклем киҫкен булыуына ишаралай. Ғөмүмән, эскелек арҡаһында енәйәт ҡылыу буйынса Башҡортостан бынан алдағы йылдарҙа ла алдынғы рәттәрҙә килде. Эсеп, үлтерешкә барып етеү буйынса ла ул, Мәскәү ҡалаһынан һәм Свердловск өлкәһенән ҡала, өсөнсө урында килә. Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығы биргән мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә, үлтереш осрағының 80 проценттан ашыуы иҫерек килеш яһалған. Бер нисә йыл элек беҙҙең республика 20 айыҡ төбәк исемлегендә булһа, 2018 йыл аҙағында был һан күпкә аҫҡа тәгәрәп, 32-се урынға күскән. Шуныһы ла иғтибар үҙәгенән ситтә ҡалмай, элегерәк эскелек һаҙлығына башлыса 40-50 йәшлектәр батһа, бөгөн иһә был төркөмгә йәштәр, үсмерҙәр күпләп эләгә. Мәсьәләне үҙ яйына ҡуйғанда, киләсәккә нигеҙҙе лә аңы сәләмәт булмаған, деградацияға бирелгән быуын һалаҫаҡ. Ә инде серек нигеҙҙә башланған тормоштоң ниндәй булырын алдан тоторға ла кәрәкмәй.

Бөгөн эскелек арҡаһында килеп сыҡҡан бәләләргә юл ҡуймау маҡсатында мөмкин булған сараларҙың барыһы ла тиерлек күрелә. Төрлө йәмәғәт ойошмалары, ауыл хакимиәттәре, старосталар ҙа был эштән ситтә ҡалмай. Проблемаға Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Фәрит улы Хәбировтың да битараф булмауы, эскелек һәм спиртлы эсемлектәрҙең законһыҙ әйләнеше менән көрәшкә сығыуы ла күңелдә өмөт уята. Контрафактлы спиртлы эсемлек һатыусыларға ҡарата яза ла ҡәтғиләштерелде. Мәҫәлән, быға тиклем өйҙән көмөшкә һатыусыларға ни бары ике мең тирәһе генә штраф һалына ине. Был йәһәттән закон проекты ҡабул ителеү менән штраф күләме 30 меңдән 50 мең һумғаса арттырылды. Язаға тарттырылған кеше бер йыл эсендә тағы ла яҙыҡ юлға баҫа икән, ундайҙарға штраф күләме 50 мең һумдан 80 мең һумғаса буласаҡ йәиһә улар бер йылға тиклем холоҡ төҙәтеү эштәренә йәлеп ителәсәк. Аңларға теләмәгәндәргә енәйәт эше асыу ҙа ҡаралған. Сауҙа кәштәләрендәге спиртлы эсемлектәргә күҙ һалһаң, уларҙың ниндәйе генә юҡ, йәнең теләгәнен, үҙеңә оҡшағанын һайлап ал... Төрлө формалағы сағыу шешәләр бөтөнләй эсмәгән кешеләрҙе лә әллә ҡайҙан ымһындырып, үҙенә саҡырып ултырғандай. Бөгөн был эсемлектәрҙең ағыу ролен үтәүе береһенә лә сер түгел. Әлбиттә, барыһы ла махсус сауҙа урындарынан ғына һатып алһа, мәсьәлә был тиклем үк киҫкен дә булмаҫ ине, сөнки хаҡтар тешләшә, шешә хаҡын түләргә барыһының да мөмкинлеге юҡ. Әммә эсергә теләгән, кеҫәһендә елдәр уйнаған, хатта тәгәйен генә эше лә булмағандар аптырап тормай. Ундайҙар теләһә нәмә ҡушып эшләнгән көмөшкә, фанфуриктарға ла риза. Ә аңды томалаусы эсемлек "етештереүселәр" клиенттарының унайлылығы өсөн бар тырышлығын һала. Көнмө, төнмө булыуына ла ҡарап тормай, үтескә яҙҙырып та, арыуыраҡ әйберҙәргә алыштырып та бирә тауарын. Бары тик алһындар, эсһендәр генә. Бындай "киң күңеллe" әҙәмдәр менән төрләсә көрәшеп ҡарайҙар ҙа бит, тик әлегә һөҙөмтә генә артыҡ ҡыуандырмай. Бигерәк тә, халыҡ араһында "фанфурик" атамаһы менән танылыу алған шыйыҡсалар арҡаһында бөтә йәмғиәт зыян ғына түгел, ысын мәғәнәһендәге фажиғә кисерә. Әлеге ваҡытта депутаттарыбыҙ бары тик медицина процедуралары өсөн генә тәғәйенләнгән һәм составында 75 процент спирт булған препараттарға алкоголь акцизы булдырыу, йә булмаһа, уны һатыуҙан бөтөнләй алыу мәсьәләһен тикшерә.

Эскелеккә ҡаршы ысын мәғәнәһендәге көрәш башланған мәлдә Белорет муниципаль район хакимиәте, эске эштәр бүлегенә лә эскелек арҡаһында килеп сыҡҡан әллә күпме проблемаларҙы ғына хәл итергә түгел, ә ҡыйралған яҙмыштар, тарҡалған ғаиләләр һәм етем ҡалған балалар мәсьәләһен дә күҙ уңында тоторға тура килә. Сараһыҙҙың көнөнән көрәш алымдарының барыһы ла тиерлек файҙаланыла: рейдтар, аңлатыу эштәре, штрафтар һәм башҡалар... Март айында муниципаль район хакимиәте тарафынан ҡалаға ингән ерҙә ҙур баннерҙар ҡуйылды. Бөгөн был баннерҙарҙағы телефон һандары буйынса законһыҙ рәүештә алкоголь һатыусыларға дөгүә белдереп шылтыратыусылар күбәйә. Әлеге ваҡытта Берҙәм дежур-диспетчер хеҙмәтенә ҡаланан, Инйәр, Сермән, Тирлән, Мәхмүт, Боғанаҡ ауылдарынан шылтыратыуҙар булған. Артабан эш алып барыу өсөн был мәғлүмәттәр полиция бүлегенә тапшырылған. Бөтә бәләнең башы - эскелек. Эске эштәр министрлығының Белорет районы буйынса бүлегенән бирелгән мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә, ошо йылдың 4 айында ғына йәмәғәт урынында эскән килеш йөрөгән - 1679, балиғ булмаған үсмерҙәрҙе эскегә йәлеп итеү буйынса - 17, тыйылған урындарҙа спиртлы эсемлек һатылған - 1, балиғ булмағандарға алкоголь продукцияһын һатҡан - 5, законһыҙ рәүештә спиртлы эсемлек һатылған 18 осраҡ теркәлгән.

Күмәкләгән - яу ҡайтарған тигәндәй, бергәләп көрәшкәндә генә "йәшел йылан" бәләһен еңеп буласаҡ. Эргә-тирәбеҙҙә йәшереп спиртлы эсемлек һатыусылар, баш күтәрмәй эсеп ятыусылар бар икән, киләсәгебеҙ, балаларыбыҙ яҙмышына битараф түгелбеҙ икән, был хаҡта ваҡытында тейешле органдарға хәбәр итеп, проблеманы хәл итеү сараһын күреү мотлаҡ.

Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# ТАҘАРЫНЫП АЛ!

**Секунд һайын организмыбыҙ тирә-яҡ мөхиттең, ризыҡтың, эсемлектәрҙең токсик агрессияһы менән көрәшә. Эйе, тәбиғәт шундай итеп яралтҡан, беҙ оҙайлы ваҡыт күп нәмәгә ҡаршы тора алабыҙ. Әммә был организмға ярҙам кәрәкмәй тигәнде аңлатмай: эске һаҡланыу режимы мәңгелек түгел.** Токсиндарҙың һәм шлактарҙың күләме билдәле бер кимәлгә еткәс, уларҙың тышҡы билдәләре лә күренә башлай. Шуға күрә организмды таҙартып торорға кәрәк. Бер кемгә лә сер түгел: бөгөн төрлө компаниялар үҙҙәренең тауарҙарын тәҡдим итә. Ләкин организмды таҙартыу сараһын үҙеңә лә эшләргә мөмкин. Бының өсөн 3 стакан һыуҙы ҡайнатығыҙ, уға 150-шәр грамм йөҙөм һәм һөйәгенән айырылған ҡара емеш һалып, тағы 15 минут ҡайнатығыҙ. Төнәтегеҙ һәм һәр иртән ас ҡарынға бер ҡалаҡ эсегеҙ. Бер нисә көндән һуң үҙгәрештәр тойорһоғоҙ: аш эшкәртеүҙә проблема булмаҫ, эсегеҙ ҡатмаҫ һәм артыҡ ауырлығығыҙ юғалыр. Ҡара емеш эсәктәрҙе таҙартып ҡына ҡалмай, составындағы витаминдар һөҙөмтәһендә организмды туҡландыра ла. Уның составындағы күҙәнәклек иҫәбенә аш эшкәртеү шәбәйә, организмдан артыҡ шыйыҡлыҡ сыға, витаминдарҙы үҙләштереү кимәле арта. Тап ошо продукт артыҡ ауырлыҡтан арынырға ярҙам итә һәм эсәктәрҙең сифатлы микрофлораһын гарантиялай.

Йөҙөм, инулинға бай булараҡ, эсәктәрҙән зыянлы матдәләрҙе сығара, бәйәрҙәр эшмәкәрлеген яҡшырта, бауыр эшмәкәрлеген еңеләйтә. Яҡшыраҡ һөҙөмтә һәм тиҙ детоксикация өсөн бер ус йөҙөмдө йыуып, уны эсе һыу менән бешекләп һәм өҫтөнә һалҡын һыу ҡойоп, бер тәүлек ултыртып ҡуя алаһығыҙ. Иртәгәһенә һыуын эсергә лә була. Был алымды бер ай дауам итегеҙ. Бындай таҙартыу ысулын һәр йәштә ҡулланырға мөмкин, ул киләсәктә күп проблемаларҙан азат итәсәк.

# ЙӨТӘЛЛӘГӘНДӘ...

**Һәр ҡайһыбыҙ ғүмерендә бер тапҡыр булһа ла һалҡын алдырғандыр, ҡурылдай менән сирләгәндер йәки башланғыс стадияһында ҡоро йөтәл менән интектергән башҡа респиратор ауырыуҙарға дусар булғандыр, могайын. Күптәр хатта ҡоро йөтәлдең еүеш йөтәлгә әйләнеп, ҡаҡырыҡ сыға башлағанын да үҙ башынан үткәргәндер.**

Йөтәл һәм ҡаҡырыҡ - организмдың сирҙән һаҡланыу реакцияһы. Түбәндәге кәңәш үпкәләрҙән һәм ҡурылдайҙан (бронхы) ҡаҡырыҡты тиҙерәк сығарырға ярҙам итер тип ышанабыҙ. Ике ҡалаҡ ҡарағай бөрөһө, бал, ярты литр һыу кәрәк буласаҡ. Һыу мунсаһы өсөн ике кәстрүл әҙерләгеҙ. Бөрөләргә һыу ҡойоп, уны ҙур кәстрүлдәге һыуға ултыртығыҙ һәм талғын утта 1 сәғәт ҡайнатығыҙ. Һуңынан төнәтмәне банкаға бушатып, ныҡлы итеп урағыҙ һәм тағы ла бер сәғәткә ултыртып ҡуйығыҙ. Көнөнә өс тапҡыр ашар алдынан ярты сәғәт алда бал өҫтәп, 50 грамм эсегеҙ. Дауаны 7 көн дауам итергә кәрәк. Шулай уҡ ҡарағай бөрөһөн термосҡа һалып, бер сәғәт төнәтергә мөмкин. Төнәтмә балаларға ла,ололарға ла берҙәй килешә.

**Тәҡдим ителгән ысулдарҙы ҡулланыр алдынан дауалаусы табип менән кәңәшләшергә онотмағыҙ!**

✓ ***Беҙ ҙә балаларҙы йылы оябыҙҙа артыҡ оҙаҡ тотмай, үҙ йүндәрен үҙҙәре күреп өйрәнһен өсөн хәстәрлек күрергә тейешбеҙ! Оло тормош юлына сығарыр өсөн ышанысլы, тоғро иптәш һайларға кәрәк!***



ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘҺЕ

# ҠОШТАРҘАН ӨЙРӘНӘЙЕК!

**Мин ҡыҙыҡ ҡына бер мәғлүмәт уҡыным әле һәм ҡоштарҙан, хайуандарҙан беҙгә, кешеләргә, үрнәк алырға кәрәк икәненә инандым! Баҡтиһәң, инә бөркөт үҙенә оя ҡорор, балалар сығарыр өсөн бына нисек пар һайлай икән, тыңлағыҙ:**



Инә бөркөт суҡышына бер сыбыҡ ала ла, һауаға бейеккә-бейеккә күтәрелә. Күтәрелә лә, өйрөлөп йөрөй башлай. Ата бөркөттәр уның тирәләй әйләнә. Инә бөркөт сыбыҡты суҡышынан ысҡындырып, аҫҡа ҡарай ташлай. Шунан ата бөркөттәр араһынан береһе сыбыҡ артынан аҫҡа ҡарай сөйә. Сыбыҡты төшөп барған еренән тотоп ала ла, инә бөркөттөң суҡышына ғына алып барып тоттора. Инә бөркөт сыбыҡты тағы ла ташлай. Ата бөркөт тағы ла сыбыҡты һауала килеш тотоп алып килтереп бирә инә бөркөткә. Был хәл әллә күпме тапҡыр ҡабатлана. Бер үк ата бөркөт инә бөркөт ташлаған сыбыҡты бер нисә тапҡыр тота алғандан һуң, инә бөркөт уны үҙенә пар итеп һайлай...

Шунан улар бейек, иң бейек ҡая башына икәүләшеп оя ҡора башлайҙар. Тирә-яҡтан ҡая башына сыбыҡ-сабыҡ ташыйҙар, унан инде икәүләшеп сыбыҡтан оя үрәләр. Ояны үреп бөткәс, икеһе лә үҙҙәренең ҡауырыйҙарын йолҡалар. Ошо ҡауырыйҙары менән улар ояны йылыталар.

Инә бөркөт йомортҡа һала, уларҙы баҫып ултыра. Себештәре сыға, улар әле сеп-сей, яп-яланғас көйө генәләр, тәндәрендә бер генә лә йөн бөртөгө юҡ. Әсе елдән, әсе ҡояштан, ҡойма ямғырҙан һаҡлап, ашарға аҙыҡ һәм эсергә һыу ташып үҫтерәләр улар себештәрен. Себештәре ҙурая төшә әҙләп ҡауырыйҙары барлыҡҡа килә.

Бына шул ваҡытта инде инә бөркөт ояһынан осоп сығып китә. Балыҡ тотоп алып килә лә, йырағыраҡ ҡына ҡаяла, балалары күрерлек алыҫлыҡта урынлашып, балыҡты ашай башлай. Ә ата бөркөт иһә ҡошсоҡтар ултырған ояның ситенә ултырып алып, уны сайҡалта. Сайҡалтҡан һайын оялағы йылы һәм йомшаҡ ҡауырыйҙар йән-яҡҡа осоп ҡойолоп бөтә. Ояла ҡап-ҡаты сыбыҡтар ғына тороп ҡала. Себештәргә ҡаты ояла уңайһыҙ, улар нишләп аталары ояны боҙа, ә әсәләре ашарға алып килмәй, нишләп улар үҙгәрҙе икәнен анламай әле. Бер көн, ике көн ашамаған ҡошсоҡтар асыға башлай. Шунан улар оянан сыға. Оянан сыҡҡан ыңғайы аҫҡа ҡарай тәгәрәйҙәр, упҡынға ҡарай осалар. Бына тап ошо ваҡытта кәрәк була ла инде һауанан осоп төшөп барған сыбыҡты тотоу һәләте! Упҡынға ҡарай осоп төшөп барған себеште ата бөркөт арҡаһына ғына һалып ала ла кире ояға илтеп ҡуя. Был хәл тағы ла әллә күпме тапҡыр ҡабатлана. Шулай, ҡолай-ҡолай себештәр осорға өйрәнә, инә бөркөттөң эргәһенә осоп барып ултыра ала, тик әсәләре башҡаса уларға ашарға ташымай. Йәш бөркөттәр осорға ныҡлап өйрәнгәс, атаһы менән әсәһе уларҙы балыҡлы урынды күрһәтергә алып төшә, аҙыҡты үҙҙәренә табып ашарға өйрәтәләр.

Кешеләргә фәһем алырлыҡ был күренеш. Беҙ ҙә балаларҙы йылы оябыҙҙа артыҡ оҙаҡ тотмай, үҙ йүндәрен үҙҙәре күреп өйрәнһен өсөн хәстәрлек күрергә тейешбеҙ! Ғаилә башлығы итеп тә балаларҙы бергә-бергә тәрбиәләп үҫтереп, оло тормош юлына сығарыр өсөн ышанысլы, тоғро иптәш һайларға кәрәк! Ҡоштарҙан, хайуандарҙан өйрәнәйек, кешеләр!..

**ИНТЕРНЕТТАН.**

ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА

# ҠӘҘЕРЕН БЕЛЕГЕҘ!

**Интернетты "сүп ояһы" тип атай бәғзе берәүҙәр. Хаҡлыҡ бар, әлбиттә. Сөнки намыҫһыҙ, мәғәнәһеҙ әҙәмдәр уны теләһә ниндәй ҡотҡо, ғәйбәт, ялған таратыу өсөн дә файҙалана бит. Әммә матур, файҙалы, кәрәкле мәғлүмәт ала белеүселәр өсөн ул, һис шикһеҙ, иң шәп сығанаҡ. Мин үҙем бына ошондай кешене позитивҡа көйләй торған яҙмаларҙы уҡырға яратам. Шуларҙың береһен "Киске Өфө"нө уҡыусылар иғтибарына ла тәҡдим итәйем әле, тинем. 80 йәшлек ҡатындың 60 йәшлек әхирәтенә яҙған хаты ул. Уны һәр кем уҡып сыҡһын ине.**

*"Ҡәҙерле Берта!*

*Бөгөн миңә 83 йәш, һәм мин һинең менән ошо тормош юлымда аңлаған бер мөһим фекер менән уртаҡлашҡым килә. Һиңә хәҙер - 60, һәм әгәр кем дә булһа миңә 23 йыл элек ошондай хат ебәргән булһа, ниндәй бәхетле булыр инем...*

*Мин хәҙер йышыраҡ уҡыйым һәм торған һайын һирәгерәк туҙан һөртөү менән шөғөлләнәм. Дачамда мин тупһаға сығып ултырып, сәғәттәр буйы тирә-яҡ тәбиғәт матурлығы менән һоҡланам - мин хәҙер түтәлдәге ҡый үләненә төкөрөп тә бирмәйем. Мин дачамда һаман да эшләйем, ләкин бының өсөн бик күп ваҡыт исраф итергә бер кемгә лә кәңәш итмәйем - ғаиләңә арналған ваҡыт күпкә мөһимерәк. Тормошҡа "сыҙап" йәшәргә түгел, ә уның менән ләззәтләнергә кәрәк. Ғәжәп, минең фекерләүем хәҙер шундай асыҡ һәм дөрөҫ, ләкин бер нәмәне лә төҙәтеп булмай инде...*

*Мин хәҙер ниҙер һатып алғанда, элекке кеүек, аҡсаны "ҡыҫып" маташмайым. Бөтөн булған иң матур эскәтерҙәр, түшәк япмалары, һауыт-һабаларҙы "бер матур көн" килгәнен көтмәйенсә, көн дә тотона башланым. Магазинға аҙыҡ-түлек ала барғанда ла иң матур кейемдәремдә кейәм. Шуны аңланым: матур күренгән саҡта аҡсаларың өсөн ҡалтырамайһың. Ятҡан һәм затлы хушбуйҙарыңды һөртөнөү өсөн "иң ҡәҙерле мәл" килгәнен көтөргә кәрәкмәй. Банккамы, табипҡамы китеп барғанда һинән хуш еҫтәр аңҡыуы - ғәжәп бер тойғо икән ул...*

*Мине хәҙер элек йыш кәйефемде боҙған тамамланып бөтмәгән йорт эштәре, супермаркеттағы йылмая белмәгән кассирҙар, туалет унитазының боҙоҡ һыу бағы кеүек ваҡ-төйәк борсомай...*

*"Киләһе аҙнала" йәки "Ҡасан да булһа" тигән нәмәләр минең тормошомда хәҙер юҡ. Иң ҡыҙыҡлы эштәргә мин шундуҡ тотонам. Һәр иртә үҙемдән шулай тип һорайым: "Әгәр иртәгә уянмаҫымды белгән хәлдә бөгөн мин ниҙәр эшләр инем? "Был бик тиҙ айныта. Мин хәҙер балаларыма йышыраҡ шылтыратам һәм әхирәттәрем менән һөйләшкәндә яйы сыҡҡан һайын ғәфү үтенәм...*

*Һәр бер ваҡ-төйәккә балалар һымаҡ шатланырға тырышам; кешеләргә рәхмәтле булыуымды белдерәм, йә булмаһа, уларҙы миңә оҡшаған сифаттары өсөн маҡтайым.*

*Ғүмеребеҙҙең ҡалған йылдары - беҙгә бүләк ул. Беҙгә бер кем бер ни гарантиялай алмай, хатта иртәгәге көнөбеҙҙе лә. Беҙгә бер кем бер ни ҙә тейеш түгел. Һәр аҙымыбыҙ - үҙебеҙҙең ҡарар ул. Ихтимал, тормошобоҙ беҙ бала саҡта хыял иткәнсә килеп тә сыҡмағандыр. Ләкин әлегә беҙ бында икән, бейергә беҙгә бер кем дә ҡамасауламай. Үҙебеҙҙән башҡа - бер кем дә!"*

Шулай итеп, был хатты мөмкин тиклем тиҙерәк уҡып сығығыҙ ҙа, йөрәгегеҙҙе тетрәтһә, уны үҙегеҙҙең ҡәҙерле кешегеҙгә ебәрегеҙ!

**Зәнифә ЯЙЫҠБАЕВА** әҙерләне.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

♦ Сәләмәтләндереү йүгереүе менән шөғөлләнә башлаҙан алда, башта дауалаусы табибығыҙ менән кәңәшләшегеҙ. Әгәр 40 йәште уҙғанһығыҙ, сәләмәтлегегеҙ маҡтанырлыҡ түгел, ниндәйҙер сир киҫкенләшкәндән һуң, хроник сирҙәрегеҙ бар икән, табипҡа күренеү мотлаҡ. Шулай уҡ үҙегеҙҙең физик формағыҙҙы ла баһалау зарур. Табип кәсергәнеш ярамай, тиһә, тимәк, шөғөлләнмәүегеҙ яҡшы.

♦ Йөрәктең тыумыштан етешһеҙлеге, митраль стеноз, ҡан әйләнеше боҙолоуы, йөрәк тибешенең тигеҙ булмауы, тромбофлебит асыҡланғанда, йүгерергә ярамай.

### Сәләмәт булғығыҙ килһә - йөҙөгөҙ

Үҙегеҙҙе бассейнға барып етергә мәжбүр итегеҙ - ҡәнәғәтлек кенә түгел, файҙа ла табырһығыҙ. Оло йәштәгеләр һөйәктәрҙе һәм мускул аппаратын нығытыуға мохтаж, тимәк, уларға йөҙергә кәрәк. Йөҙөү һөйәк туҡымаһын һәм умыртҡа һөйәген нығыта, йөрәк эшмәкәрлеген һәм тын алыу системаһын стимуллай, һынды формалаштыра һәм һығылмалылыҡты арттыра, сыҙамлылыҡты үҫтерә һәм хәл-торошто яҡшырта. Йөҙөү аэробик күнекмәләргә инә: өс минутлыҡ йөҙөү ваҡытында мускулдар максималь күләмдә кислород ҡуллана. Йөҙөү - әгәр спорттың көс ҡулланыу төрҙәре рөхсәт ителмәһә, быуындар, арҡа, артыҡ ауырлыҡ менән проблемалар булғанда иң яҡшы асыл. Ул, йәрәхәтләнеү хәүефе ҙур булмағанлыҡтан - иң аяулы спорт төрө.

Бассейндарҙа йөҙөү менән шөғөлләнеү өсөн стандарт ваҡыт - аҙнаһына ике тапҡыр 45-әр минут (артыҡ шөғөлләнгәндә координация үҙгәреп, "диңгеҙ" атлауына әйә булырға мөмкин). Әммә оло йәштәгеләргә аҙнаһына өс тапҡыр яртышар сәғәт йөҙөргә кәрәк. Даимилыҡ һәм уртасалыҡ һөйәк туҡымаһын яҡшы нығыта.

Шуны иҫегеҙҙән сығармағыҙ: бассейнда тиҙлек мөһим түгел. Йәйләү ҙа организмығыҙға шул уҡ көсөргәнеште бирәсәк. Тиҙ темп иһә һеҙҙе туктап ял итеп алырға мәжбүр итер, ул һуңынан төп көсөргәнешкә йөгонто яһаясаҡ.

Атлап йөрөү кеүек үк, йөҙөү өсөн кире күрһәткестәр юҡ, бер нисә сикләү генә бар (һәм мотлаҡ тире ауырыуҙары булмауы тураһында медицина справкаһы кәрәк).

Шулай уҡ йөҙөү өҫтәмә күнекмәләр менән аралаштырып алып барылған аква-аэробика төркөмдәренә йөрөргә мөмкин.

♦ Тәрән булмаған һыуҙа атлау һәм йүгереү ҙә йәйәү йөрөү кеүек үк файҙалы, әммә һыуҙың ҡаршылығы был күнекмәне тағы ла һөҙөмтәлерәк итә.

♦ Тәрән һыуҙа атлап йөрөгәндә һәм йүгергәндә аяҡтар һыу төбөнә теймәскә тейеш (йөҙөү билбауҙары йәки һыу өҫтөндә тотоусы башҡа ҡулайламалар файҙаланырға мөмкин).

♦ Борт эргәһендә таянғыстарға тотоноп кирелеү күнекмәләре эшләү (яйлап һәм билдәле торошта туҡтап тороп) файҙалы.

**С. КУЗИНА.**

**(Дауамы бар).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БАШҠОРТ РОМАНДАРЫ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**22-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Рәхимов. Быуат. Тараҡан. Ҡаяу. Дәүләт. Солтанов. Шарт. Ыҡ. Тырнаҡ. Кәрим. Арҡан. Михнәт. Ғәскәр. Валкаран. Тояҡ. Март. Креп. Удав. Укол. Аҡса.

**Вертикаль буйынса:** Сәркәтип. Ҡолшәрипов. Мағул. Турнир. Кактус. АЗС. Хәбәр. Автор. Ампула. Ҡауҙы. Руна. Ватандаш. Мәжитов. Рәхмәт. Латин. Табаҡ. Таяҡ.

*ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ*

# КАРТУФ ШЫТЫҒЫ...

**Хәҙер баҙҙан сығарған картуфтарҙың шытҡан мәле. Ҡайсаҡ картуфтың аҡ һабаҡтары шул хәтлем оҙон булып үҫеп китә, кешеләр уны йолҡҡолап, таҙартып, сығарып ташлау яғын хәстәрләй. Ә бит ошо аҡ һабаҡтар һаулыҡҡа бик файҙалы. Уйлап ҡараһаң, тәбиғәттә барса нәмә файҙалы кеүек, тик ҡуллана белергә генә кәрәк. Үлемдән башҡа барыһынан да дауа бар, тип юҡҡа ғына әйтелмәйҙер.**

Картуфтың аҡ һабаҡтарын ҡулланыу тураһында мин бер гәзиттән уҡып белдем шикелле. Ул ваҡытта һыуыҡта эшләпме, әллә нәҫелдән күсепме, быуындарым шешеп ауырта башлағайны. Күҙемә ниндәй рецепттар ташлана - барыһын да ҡулланып ҡараным. Картуф шытҡан мәл ине. Оҙон аҡ һабаҡтарын 1 см яҫылыҡта итеп турап, бер литрлыҡ банкыға ныҡлап тултырҙым, өҫтөнә сыҡҡансы араҡы ҡойҙом. Ике аҙна тирәһе ҡараңғы ергә ҡуйып торҙом да, ваҡытын билдәләп, ике аҙна ваҡыт үткәс, ауыртҡан быуындарымды һылай башланым. Был төнәтмә һәр ваҡыт карауат эргәһендә ҡул аҫтында торҙо. Күҙгә ташланған һайын тубыҡ быуындарына ла һәм яурын ауыртҡанда ла һөртөп йөрөнөм. Һөртөнгәндән һуң йылы шәлгә төрөп, яулыҡ менән нығытып бәйләп ҡуйырға кәрәк. Ул төнәтмәнең еҫе лә яҡшы ғына, тәнгә һеңеп, насар еҫ сығып тормай аҙаҡ. Унан бирле арыуыҡ ваҡыт үтте инде, оҙаҡ йылдар ауыртҡан яурындарым да һәм быуындарым да һыҙламай, шешеүе лә үтте. Төрлө ысулдар ҡулландым, әлбиттә, әммә картуф төнәтмәһе лә ауыртыныуҙарҙан ҡотолорға ярҙам иткәндер тип ышанам. Һәр хәлдә, ҡулланып ҡарарға кәрәк, ҡулдарҙы төшөрмәй, йүнәлеүгә өмөттө өҙмәй, даими рәүештә генә һөртөп, һыланып йөрөргә кәрәк.

Ҡыҫҡаһы, һауығыу юлын һәм сараһын һәр саҡ үҙегеҙ эҙләгеҙ, ҡул ҡаушырып, ауырыуға бирешеп ултырмағыҙ. Тик ниндәйҙер ысул һәм дарыуҙарҙы ҡулланыр алдынан табип менән кәңәшләшеү тәҡдим ителә.

**Зануфа АРЫҪЛАНОВА.**

*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ*



**Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы ойошторолоуының 80 йыллығын билдәләне.**

# ФИЛАРМОНИЯ ЮБИЛЕЙЫ

Залға ветерандар, республика филармониялары директорҙары, абруйлы ҡунаҡтар һәм эстрада сәнғәтен һөйөүселәр йыйылды.Концерттың беренсе бүлегендә филармонияның тарихи осорҙарына байҡау яһалды. Икенсе бүлектә тамашасылар музыка донъяһына сумды. Байрамда Башҡорт дәүләт филармонияһының бөтә ижади коллективы - тынлы оркестр, ҡурайсылар ансамбле, легендар коллективтар ҡатнашты. Юбилярҙарҙы Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы исеменән мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова ҡотланы: "Беҙҙең филармония хаҡлы рәүештә Башҡортостандың төп мәҙәни үҙәктәренең береһе булып тора. Коллектив Рәсәй һәм халыҡ-ара сәхнәлә республика сәнғәтен лайыҡлы күрһәтә. Артистарҙың, музыканттарҙың һәм бейеүселәрҙең хәҙерге быуыны өлкән коллегаларының иң яҡшы ижади традицияларын һаҡлай һәм үҫтерә. Шул рәүешле филармония тамашасыларының һөйөүен һәм тоғрологон яулауын дауам итә. Коллективығыҙға беҙҙе йөкмәткеле концерт программаһы менән шатландырыуҙы, республика ҡалаларына һәм ауылдарына гастролдәр менән сығыуҙы дауам итеүен теләйем. Һеҙгә яңы үрҙәр, илһам һәм ижади уңыштар!", - тиелә республика етәксеһенең ҡотлауында. Юбилейлы миҙгелдең йомғаҡлау концерты тамашасыларға бай театрлаштырылған тамаша бүләк итте.

# ЯҢЫСА ЯРЫШАСАҠТАР

**8 июндә "Берҙәмлек" Халыҡ-ара милли мәҙәниәттәр фестивале сиктәрендә Әлшәй районында "Быуаттарҙы бәйләр еп" Республика башҡорт балаçы фестивале үтәсәк.**

Быға тиклем был сара башлыса күргәҙмә проекты формаһында ойошторолһа, быйылдан ҡатнашыусылар һабантуй майҙанында балаç һуғып ярышасаҡ. Әлшәй, Ғафури, Миәкә, Бишбүләк, Архангел райондарынан, Өфө, Бөрө ҡалаларынан йыйылған бәйгеселәр традицион буй балаç һуғып күрһәтәсәк. Бәйге иртәнге 9-ҙа башланып, көндөҙгө 3-тә тамамланасаҡ. Тағы ла бер һуғыу станогы конкурстың тамашасылары өсөн тәғәйенләнә. Унда һәр кем "Дуҫлыҡ юлы"на үҙ өлөшөн индерә аласаҡ. Бәйгелә ҡатнашыусыларҙың эштәре тап ошо атама аҫтындағы коллекцияға тупланып, тирмә биҙәүҙә ҡулланыласаҡ. Ойоштороусылары - БР Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Әлшәй районы хакимиәте.

# БЕҘҘЕКЕЛӘР!



**Һарытауҙа Бөтөн Рәсәй һәүәҫкәр ижади коллективтар фестиваль-конкурсының төбәк һайлау туры үтте.**

Башҡортостандан Учалы районының "Ләйсән" халыҡ бейеү ансамбле, Әбйәлил районының "Серле моң" халыҡ вокаль ансамбле һәм Баймаҡ районының Буранбай сәсән исемендәге ҡурайсылар ансамбле ҡатнашты. Һәр коллектив та үҙ номинацияһында еңеүсе булды. Конкурста Волга буйы һәм Урал федераль округтарынан 60-тан ашыу коллектив үҙ көсөн һынаны. Һарытау социаль-иҡтисад институты залында шулай уҡ оҫталарҙың концерты булды, унда Башҡортостан коллективтары ла сығыш яһаны. Бәйге 2019-2024 йылдарҙа "Ижади кешеләр" федераль проекты сиктәрендә йыл һайын үтәсәк. Ул Рәсәй халыҡтарының матди булмаған мәҙәни мираҫын һаҡлауға һәм һәләтле балалар һәм үҫмерҙәр ижадына ярҙам итеүгә йүнәлтелгән.

ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# ЕҢЕҮСЕ - СИБАЙҘАН!

**Күптән түгел Октябрьский ҡалаһында Ғата Сөләймәнов исемендәге Ҡурай байрамы еңеүсеһе билдәләнде. Республиканың 10 ҡалаһы һәм 19 районынан, шулай уҡ Силәбе һәм Ҡурған өлкәләренән килгән 324 бәйгесе араһынан Шамил КҮСӘМИШЕВ иң оҫтаһы тип танылды. Ошо уңайҙан Шамил Шакир улы менән әңгәмәләшеп алдыҡ.**



**▸ Ҡурайсылар араһында иң абруйлыһы иҫәпләнгән бәйгелә еңеүгә юлығыҙ оҙон булдымы?**

- 7-се класта ҡурай уйнарға өйрәнеп, унан һуң Сибай сәнғәт колледжын, БДУ-ның Сибай институтын, З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтында магистратура тамамланым, быйыл диплом аласаҡмын. Йәғни беренсе тапҡыр ҡулыма ҡурай алып, ошо музыка ҡоралын ғүмерлек юлдашым итеп һайлағандан алып, тиер инем. Музыкант та бит, спортсы кеүек уҡ, көн һайын физик әҙерлеген нығытырға тейеш, шунһыҙ формаңды тиҙ юғалтасаҡһың. Оҫталыҡтың нигеҙендә хеҙмәт ята. Унан һуң, ҡурайсылар араһында үткәрелгән һәр бәйге ҙур яуаплылыҡ талап итә. Унда енел-елпе генә әҙерлек менән барып тормаһаң да була. Сөнки бәйгенең талаптары ҡаты - 100 башҡорт халыҡ көйөн, уның тарихын, легендаһын белергә тейешһең. Билет буйынса минә "Юлғотло", "Тәфтиләү" эләкте, баһалама аҙгалары, берәй марш уйнап күрһәт, тигәс, "Дим буйы бүртә" көйөн башҡарҙым. Халыҡсан итеп, борондан халыҡ араһында һаҡланып килгәнсә уйнау ҙа талап ителә.

**▸ Бәйгенең ҡурайҙы пропагандалау менән бергә һәләтле башҡарыусыларҙы асыҡлау тигән маҡсаты ла бар. Үҙегеҙ ҙә уҡытыусы булараҡ, ҡурай сәнғәтенең бөгөнгө торошо менән ҡәнәғәтһегеҙме?**

- Был бәйге еңеүселәрҙә үҙе үҫтереп ала, тиергә кәрәк. Ҡатнашып, башҡаларға ҡарап ҡайтыу ҙа ҙур тәжрибә. Өйрәнәһең, сәм уяна. Баһалаусылар составы ла абруйлы һәм талапсан ҡурайсыларҙан, белгестәрҙән тора, быныһы ла үҫтерә. Мин дә 2-3 тапҡыр килеп, быйыл ғына Гран-при алыуға өлгәштем. Быйыл да еңеүсе тигән исемгә лайыҡлы егеттәр күп ине, араларында бик көслөләре бар. Улаpҙың барыһы ла алда әле.

Үҙем башлап һөнәри белем алған Сибай сәнғәт колледжында 2007 йылдан бирле уҡытыусы булып эшләйем һәм ошо арауыҡта ҡурай класына кеше йыя алмай ултырған ваҡыттар булманы. Беҙҙең яҡта, Сибай ҡалаһында, ҡурайсыларға иғтибар ҙур, был да үҙ өлөшөн индерәләр. Улай тиһәң, һуңғы йылдарҙа республиканың бөтөн төбәктәрендә лә ҡурайҙа уйнау әүҙемләште. Быйыл бәйгелә сит төбәктәрҙән дә ҡатнашыусылар булды. Еңеүемә үҙемдең уҡытыусыларым Мөхәррәм Кәримов, Әхиәт Ғәйетбаев, Йәмил Үтәбаев, Нурғәли Ҡайыҡбирҙиндарҙың да көсө һәм ышанысы һалынғанлыҡтан, киләсәктә үҙемдең уҡыусыларымдан да ошондай шатлыҡлы хәбәрҙәр ишетермен, тип өмөтләнәм. Ҡурайға бит ул бер ғашиҡ булһаң, был һөйөү ғүмерлеккә әйләнә. Мине бар яҡлап аңлаған ғаиләмә - ҡатыныма һәм балаларыма ла рәхмәтлемен.

**Ләйсән ДАЯНОВА**
**әңгәмәләште.**

АТЫҢ КЕМ?

# КИЛӘСӘГЕН УЙЛАП...

**Өфөлә йәшәүсе Луиза һәм Фидан Мәзитовтар ғаиләһендә Мөхәмәткәрим, Ибраһим исемле ике ул һәм Сара исемле бер ҡыҙ үҫә.**



Өйҙә лә, балалар баҡсаһында ла башҡорт мөхитендә тәрбиәләнгән балалар туған телдәрендә генә аралаша, шартлатып шиғыр һөйләй, бейей, фольклор түңәрәгенә йөрөй, әкиәт конкурстарында ла ҡатнаша. Йәш әсә балаларға башҡорт мөхитендә үҫеү, рухи тәрбиә биреү исем ҡушыуҙан башлана, тигән фекерҙә. "Өлкән улыбыҙға исем һайлағанда мин бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм исемен, иптәшем Кәрим ҡартатаһына оҡшатып, уның исемен ҡушырға теләне. Шунан уйлаштыҡ та, ике исемдең дә мәғәнәләре матур тип, Мөхәмәткәрим тип исем бирҙек тә ҡуйҙыҡ. Улыбыҙҙың Мөхәммәт тигәндән "данлы, маҡтаулы" һәм Кәрим тигәндән "йомарт, киң күңелле" булып үҫеүен теләнек. Мөхәмәткәримгә 6 йәш, ул быйыл мәктәпкә бара. Икенсе улыбыҙ Ибраһим, был да бәйғәмбәр исеме. Уға әле 5 йәш, тәрбиәле һәм үҙе йөрөткән исемгә тап төшөрмәҫтәй ир-уҙаман булып үҫер тип ышанабыҙ. Иң кесебеҙ - ҡыҙыбыҙ Сараға 2 йәш, Ибраһим бәйғәмбәрҙең ҡатынының исеме был, "аҫыл, иң шәп" тигән мәғәнәһе лә бар. Балаларыбыҙҙың исемдәре яҙмыштарына йоғонто яһар, тип бик ышанабыҙ һәм уларҙың киләсәктәрен уйлап ҡуштыҡ та инде", - ти Луиза Йәнғәли ҡыҙы. Ул шулай уҡ таныштары, туғандары араһында ла хәҙер кешенең исеме оло мәғәнәгә эйә булыуын аңлағандар барлығы, Сафия, Рамаҙан, Диләфрүҙ, Йосоп һәм башҡа шундай матур атлы балалар тәрбиәләүселәр тураһында ла телгә алды. Олатай-өләсәйҙәрен һөйөндөрөп, атай-әсәһенә терәк булып, бағланған өмөттәрҙе аҡлап үҫһен был кескәйҙәр!

**Сәриә ҒӘБДИНОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

# ЯРҘАМ ИТӘ АЛМАҺАҢ...

## ҡамасаулыҡ итмә

Ҡатын алһаң, утын ал, тәү мәләндә ҡотон ал.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Үҙеңә ҙур ҡәнәғәтләнеү биргән эште эшләйһең икән, тимәк, һин - азат.

**(Вольтер).**

Йәшәйеште төп һорауы - "Мин нимә ала алам?" түгел, ә "Мин нимә бирә алам?"

**(Роберт Баден-Пауэлл).**

Донъяла бик күп мөғжизәләр бар, әммә кешенән үҙенән дә ҙурыраҡ мөғжизә юҡ.

**(Софокл).**

Кәрәкле ваҡытта әйтелгән һүҙ мөғжизә тыуҙыра һәм ауыр хәлдән ҡотҡара. Һүҙ ярҙамында тотош бер система тәҙөп була.

**(Иоганн Гете).**

Мин иртәгәнән ҡурҡмайым, сөнки мин кисәгене күрҙем һәм бөгөнгөнө яратам.

**(Уильям Уайт).**

Юғары әхлаҡлы кеше үҙен әхлаҡлы тип иҫәпләмәй, шуға ла ул юғары әхлаҡлы.

**(Лао Цзы).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл:"Йыл һайын сифат конкурсында еңеүсе бер фермерҙан ул үҫтергән кукуруз уңышының серен һорағандар. Фермер, был уңыштың бар сере - үҫкән кукурузымдың иң яҡшы сортлы сәкәндәрен күршеләремә таратыуҙа, тип яуаплаған. "Нисек инде улай, - тип аптыраған кешеләр, -һуң күршеләрегеҙ ҙә яҡшы уңыш үҫтергәс, һеҙгә конкурент булалар ҙабаһа". Шунан фермер үҙ серен тулыраҡ аңлатып биргән:"Беләһегеҙме, ел бит минең баҫыуымдағы кукуруз һеркәләрен - күршеләрҙекенә, күршеләрҙекен минекенә тарата. Әгәр күршеләрҙең баҫыуындағы кукуруз насар сортлы булһа, тиҙҙән минең баҫыуҙа ла үҫентеләр насарланасаҡ. Мин яҡшы сортлы кукуруз сәсәм икән, күршеләрҙең баҫыуында ла яҡшы сортлы кукуруз үҫеүен хәстәрләргә тейешмен. Ә үҙ сәсеүлегең кем нисек тәрбиәләй - быныһы инде икенсе мәсьәлә..."**

**Беҙҙең тормошта ла шулай бит. Уңышлы булырға теләгән кеше үҙ әйләнә-тирәһендәгеләрҙең дә уңышлы булыуы тураһында хәстәрләргә һәм уларға ярҙам итергә тейеш. Кем яҡшы йәшәргә теләй, башҡаларға ла яҡшы йәшәргә ярҙам итергә тейеш. Әйләнә-тирәндәгеләр ни тиклем яҡшыраҡ йәшәһә, һиңә лә яҡшыраҡ бит. Беҙ барыбыҙ ҙа берберебеҙ менән бәйле был донъяла..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

"Башҡортостан нәшриәте" дәүләт унитар предприятиеһы типографияһында баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13)

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 7 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 459